ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

17-23 май (һабанай) 2024

№ 19 (1112)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кем ҡылыс менән килә...



3

Башҡаларға оҡшарға тырышма, ә үҙең булып йәшә донъяла



8-9

Күргәҙмәлә... мәркәзебеҙҙең бай тарихы




12

Йәштәргә... аралашыу өсөн мөмкинлек




13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Алдаҡсылар заманында йәшәйбеҙ. Һинең улар тоҙағына эләккәнең булдымы?

***Фәриҙә ИҒТИСАМОВА, Өфө калаһы:*** Кеше ғүмере бик ҡыҫҡа икәнлеген беләбеҙ. Ололар юҡҡа ғына өс көнлөк донъяла йәшәйбеҙ, тип әйтмәгән. Ҡыҫҡа ғына ошо ғүмерендә әҙәм шатлығын да, ҡайғы-хәсрәтен дә күп күрә. Быларҙың барыһы ла кешегә һынау итеп ебәрелгәнен күптәр аңлай. Белмәгәндәре лә күп.

Яңы йыл алдынан танышым баҙарҙа ялған мең һум биреүҙәрен һөйләгәйне. Табынға кәрәк-яраҡ алған да, ҡайтып, янсығындағы ҡалған аҡсаһын һанарға булған. Ҡараһа, купюралар араһында "неплатежное денежное средство" тип яҙылғаны бар ти. "Бер мең һум юғалтыуҙан түгел, алданғаным өсөн нык ҡайғырҙым, - ти был. - Хатта башыма ҡапты. Ятып та ҡарайым, йөрөп тә ҡарайым, тынысланып булмай. Был хәлдән кемделер алдап ҡына ҡотолоромдо аңлағас, теге ялған аҡсаны тотоп, тағы баҙарға сығып киттем. Унда барып етмәнем, бер аҙ ҡурҡытты ла. Урамда үҙе бәйләгән әйберҙәр һатып торған әбейҙән 3 пар ойоҡбаш алдым да тиҙ генә ҡайтып киттем. Үҙемде аҙаҡ әрләнем: ни эшләп берҙе генә алманым инде, исмаһам, ҡалған аҡсаһын бирер ине, тип..."

"Пенсиянан пенсияға йәшәгән әбей-һәбейҙе алдарға оялманыңмы ул?", - тип һуҡранғайным, "Алдаҡсылар заманында йәшәйбеҙ бит, һаман шуны аңламайһыңмы ни?", - тип яуапланы.

Аңлайым да ул. Кемдер туҡтатырға тейеш тә инде был яманды. "Алдандым, мин дә алдайым әле", тип, ниәтләү менең өсөн башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Был бит "Артабан алдау - һиңә" тип, эстафета тапшырған һымаҡ килеп сыға ла баһа. Алдашыуҙы туҡтатыр, алдаҡсыларға яза бирер өсөн ялған аҡсаһын тотоп, хоҡуҡ һаҡлау органдарына барһа, бына булыр ине кешесә...

Алдаҡсылар заманында йәшәйбеҙ, тигәне дөрөҫкә лә тура килә инде ул. Ҡайҙа ғына барһаң да, алдап, һинән файҙа күрергә теләгәндәр күп. Юл ыңғайы эштән ҡайтҡанда ҙур сауҙа селтәрҙәренең береһенә инәм. Алған әйберҙәремде иҫәпләп бөтә лә, кассир йыш ҡына "Чек кәрәкме?" тип һорай. Чек алып, ҡайтарылған аҡсаны һанау ғәҙәтем юҡ минең. Шулай ҙа бер көн чектың кәрәклеген белдергәс, кассир тағы 4-5 тапҡыр "клавиатураһы"на баҫҡас ҡына чекты сығарып бирҙе. Нимәләрен алып ташлағандыр, белмәйем, әммә бер түгел, өс "гриппер" тип яҙылған пункт бар ине. Икенсе тапҡыр ингәндә "Был юлы бер ниндәй ҙә гриппер алманым", тип дәғүә белдергәйнем, "Ул япмалы пакет була" тип аңлатты һатыусы. Кәнфит, кипкән емеш-еләк һалынған полиэтилен тоҡсай булып сыҡты уныһы. Уға хаҡты айырым алалар, баҡтиһәң.

Шуға күрә алдаҡсылар заманы тип заманды әрләгәнсе, алданмаҫҡа тырышырға, мутлашыусыларға ҡаршылыҡ күрһәтергә, уларҙы торға ярҙам итергә кәрәк, тип уйлайым.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАРЫҒЫҘ, КҮРЕГЕҘ!

**Ишембай районында урынлашҡан Торатау итәгендә этнокомплекс асылды. Уны асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Этнокомплекс "Торатау" геопаркының визит-үҙәге эргәһендә төҙөлгән һәм 6 башҡорт тирмәһенән торған ансамблдән ғибәрәт. Уларҙың һәр береһе махсус металл ҡулайламаға ҡуйылған. Иң ҙуры - 12 метрлыҡ тирмә, ул кафе кеүек эшләйәсәк һәм 40 урынға иҫәпләнгән. Тағы бер тирмә сувенир магазины итеп күҙаллана, унда урындағы оҫталарҙың һәм һөнәрселәрҙең әйберҙәре тәҡдим ителәсәк. Бында Радий Хәбиров улар менән аралашты, изделиеларын ҡараны, ҡул эштәре һорау менән файҙаланамы-юҡмы икәнлеге тураһында ҡыҙыҡһынды. Һөнәрселәр әйтеүенсә, туристар уларҙың продукцияһын теләп һатып ала.

**(Дауамы 16-сы биттә).**



12+

ИШАРА

# БЕР ТӨРЛӨ УҠЫТАЛАР,

## икенсе төрлө һорайҙармы?

**Йылдағыса, быйыл мәктәп тамамлаясаҡ уҡыусылар өсөн генә түгел, уларҙан бигерәк ата-әсәләр, мәктәптәрҙең уҡытыусылары өсөн дә тулҡынландырғыс та, борсолоулы ла мәлдәр етә. Мартта уҡ илдә ваҡытынан алда Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырыу башланды, быйыл уны өс меңгә яҡын кеше тапшырҙы.**



Әкемдәр һуң улар ваҡытынан алда һынауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә уҡыусылар? Беренсенән, уҡыу планын тулыһынса үҙләштергән, академик бурыстары булмаған, һеҙөмтә инша йә изложение өсөн "зачет" алған һәм мәктәп педсоветы тарафынан рөхсәт бирелгән 11 класс тамамлаусылар; урта һөнәри белем программаһы буйынса уҡыусылар; сит илдәрҙең белем биреү ойошмаларында дөйөм урта белем алыусылар. Бынан тыш, Дәүләт имтихан комиссияһы ҡарары буйынса үткән йылдарҙа мәктәп тамамлаусылар.

Әйткәндәй, хәҙер тиҫтә ярым йыллап инде Берҙәм дәүләт имтихандары ин ҡыҙыу дискуссия объекты булып тора. Һәм, ғөмүмән, ошо форматта имтихандар башланғандан алып бәхәстәрҙең тынып торғаны юҡ. Бер осор хатта БДИ-ны бөтөрөп, белем биреүҙең элекке "совет" системаһына ҡайтыу ихтималлығы хаҡында ла имеш-мимештәр булып алғайны. Күптәрҙең фекере буйынса һәм уның нигеҙле булыуында шик тә юҡ: БДИ-ны бөтөрөп, элекке совет осоро имтихандарына ҡайтыу, һис шикһеҙ, юғары уҡыу йорттарына ингәндә коррупцияға юл асасаҡ. Быны менән килешмәү мөмкин дә түгел һәм шуның өсөн дә БДИ-ны юҡҡа сығарыу ҙа мөмкин түгел.

Әлбиттә БДИ формаһының ыңғай һәм кире яҡтары хаҡында ла бик күп һүҙҙәр булды, улар бөтәбеҙгә лә яҡшы таныш. Мәсәлән, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә билдәләнеүенсә, уҡыусылар мәктәптә имтихандар ваҡытында талап ителгән белемде алмай, шуның өсөн дә дәүләт етәксеһе Хөкүмәткә уҡыу-уҡытыу йөкмәткеһен тикшерергә ҡушты. "Уҡыу йөкмәткеһе балалар өсөн уйланған һәм тигеҙләнеш хәлендә булырға тейеш һәм уларҙы дәрестә бер төрлө уҡытып, имтихандарҙа икенсе төрлө белем талап итеүгә юл ҡуйырға ярамай. Уҡыу программаһы менән имтихан һорауҙарының тап килмәүе арҡаһында ата-әсәләр репетитор ялларға мәжбүр була, ә быныӊ өсөн уларҙың бөтәһенең дә мөмкинлеге юҡ",- тине Президент.

Ысынлап та, дөрөҫөн әйткәндә, мәктәп урынына уҡыусыларҙы репетиторҙар уҡыта килеп сыға түгемле һуң? Ә бит күптәргә тап ана шул репетиторҙар яҡшы әҙерлек тәьмин итеп, БДИ-ны юғары балға тапшырырға ярҙам иткән осраҡтар бик күп һәм был бер ҙә сер түгел. Ә инде репетитор итеп балаларҙың үҙҙәрен уҡытҡан уҡытыусыларҙы яллау, йомшаҡ итеп әйткәндә, әхлаҡһыҙлыҡ һәм был закон тарафынан тыйыла. Үҙ хеҙмәте өсөн уҡытыусыға былай ҙа эш хаҡы түләнә. Шуның өсөн дә ул үҙ бурысын намыҫлы һәм фиҙаҡәр башҡарырға бурыслы. Ә инде ата-әсә репетитор итеп мәктәптән тыш берәй белгесте яллай икән, быныһы уларҙың үҙ эше. Әлбиттә, һәр ата-әсә балаһы яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшһен өсөн барыһын да эшләргә тырыша, тик был тырышлыҡ бер яҡлы ғына түгел, ә мәктәп педагогтарының эскерһеҙ ярҙамы менән атҡарылырға тейеш. Уҡытыусы беренсе сиратта баланың белемен тикшереүсе түгел, ә белем биреүсе ул. Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитет ағзаһы Анна Скрозникова әйтмешләй, БДИ һорауҙарына мәктәп программаһынан тыш биремдәрҙең булыуы сәбәпле, ата-әсә репетитор хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә мәжбүр ҙә инде. "Ҡайһы бер һорауҙарҙың мәктәп программаһы менән бөтөнләй уртаҡлығы юҡ, ә ҡайһы бер биремдәр олимпиада кимәленә яҡын. Был бигерәк тә биология, математика, информатика, химия кеүек фәндәр буйынса күҙәтелә",- ти депутат.

Ғөмүмән, Владимир Путин үҙенең БДИ-ға ҡарашын былтыр уҡ әйтеп биргәйне инде. БДИ-ны тулыһынса юҡҡа сығарыу менән ул килешмәүен әйтте, сөнки БДИ уҡыусыларға, бигерәк тә төпкөл төбәктәрҙә йәшәүселәргә, уҡыуҙарын артабан дауам итергә мөмкинлек бирә һәм белемдәрен сифатлыраҡ итә, тине ул. Быйылғы Мөрәжәғәтнамәлә лә был хаҡта һүҙ булды. БДИ-ны бөтөрөү түгел, киреһенсә, уның тәртиптәрен камиллаштырыу, атап әйткәндә, мәктәп тамамлаусыларға бер предметтан имтиханды ҡайтанан биреү мөмкинлеген ҡарарға һәм быны вуздарҙа ҡабул итеү осоро тамамланмаҫ борон эшләргә кәрәклеген тәҡдим итте. Ысынлап та, был осраҡта мәктәп тамамлаусыға юғарыраҡ балға эйә булырға һәм юғары уҡыу йортонoң ҡабул итеү комиссияһына документтарын бирер өлгөрөргә форсат тыуасаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Алдаҡсылар заманында йәшәйбеҙ. Һинең улар тоҙағына эләккәнең булдымы?

***Фәрит РӘМОВ, Мәләүез районы:*** Алдаҡсылар заманы түгел, муттар, мутлашыусылар йәшәй торған ваҡыт әле. Алдаҡсы менән мутлашыусыларҙы бер ҡалыпҡа һалырға ярамай. Мутлыҡ - ул енәйәт. Кешенең аҡсаһына, милкенә эйә булыу өсөн барлыҡҡа килгән алым.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, был төр енәйәт бөгөн беҙҙең республикала иң таралғаны. Иҫкәртеү, аңлатыу эштәре алып барылыуға ҡарамаҫтан, аҙна һайын мутлыҡ тоҙағына эләгеп кенә торалар бит.

"Тиҙ арала аҡса кәрәк, ҡыҙың йәки улың аварияға эләкте", - тип шылтыратып йәки дәүләт органдары ҡиәфәтендә килеп, оло йәштәгеләрҙе алдаусылар хаҡында киң мәғлүмәт сараларында йыш яҙыла. Әммә зыян күреүселәр һаны кәмемәй. Мутлашыусылар яңынан-яңы ысулдар уйлап таба. Еңел табыш алыр өсөн улар телефондан тыш, интернет, социаль селтәрҙәрҙе лә ҡулланa.

Мин үҙем улар ҡапҡанына эләккәнем юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, шылтыратыуҙар йыш була. Күптән түгел генә ҡыҙымдың тауышы менән "Кала ситендә аварияға эләктем" тип, илаулап шылтыраттылар. Урының да, адресын да дөрөҫ әйттеләр. Тик шунда ғына айырма ине. Ҡыҙым минә бер ҡасан да "пап" тип өндәшмәй. Теле "атай" тип асылды уның. Ҡатын-ҡыҙ илағанын ишетһә йәки күрһә, һәр ир кеше лә көсһеҙләнеп, баҙап ҡала. Минең дә тәүҙә тубығым ҡалтыранып китте. Башҡортса өндәшәм тегегә. Урыҫса яуап бирә. Хәҙер полицияға шылтыратам, тигәс кенә трубканы һалды.

Бөгөнгө заман бурҙарына банк картаһынан аҡса урлау бер ни тормай, тиҙәр. Муттар командаһында, минеңсә, банк хеҙмәткәрҙәре лә, бәлки, элек эшләп киткәндәре лә барҙыр, сөнки аҡса күсереү, иҫәп асыу системаһын беләләр.

Шуға күрә, алданмаҫ өсөн, иң беренсе, үҙеңә һаҡ булырға кәрәк. Банкоматтан аҡса алғанда, күсергәндә хәүефһеҙлек сараларын күрергә. Сит ҡоралдар күҙгә ташланмаймы, клавиатура шик тыуҙырмаймы? ПИН-код йыйған ваҡытта буш ҡулығыҙ менән ҡаплағыҙ, сөнки мутлашыусылар уларға махсус ҡорал урынлаштыра, ул картаның магнит таҫмаһындағы мәғлүмәтте күсереп ала. Банкоматҡа йәшерен камера йәки өҫтәмә клавиатура ҡуйыуҙары ла ихтимал. Ялған клавиатураны ысынының өҫтөнә урынлаштыралар, ә банкомат ғәҙәттәгесә эшләй. Кеше хаҡында мәғлүмәткә эйә булып, уның картаһының күсермәһен эшләтеп алғандар ҙа бар. Ошондай юл менән аҡса урлаусылар тураһында ла ишеткәнем бар. Бергилке аҡсаны арттырырға вәғәҙә итеп, шылтыраттылар. Һаҡлыҡ кенәгәһенә аҙыраҡ аҡса һалғайным. Шуны ҡайҙан белеп ҡалғандар! Инде өгөтләнеләр, инде ҡыҙыҡтырҙылар. Һөҙөмтәлә аҡсаны алып тотоноп ҡуйҙым. Финанс пирамидаларының яҡшыға килтермәүен беләм бит инде.

Бына шулай, дуҫтар, мутлашыусыдарҙан һаҡ булығыҙ, хәләл көсөгөҙ менән тапҡаныгыҙҙы һаҡлағыҙ. Буштың атаһы үлгән, тигән бит боронғолар. Бушлай ғына, бер нәмә лә эшләмәй генә байып булмай ул. Етеш йәшәйем тиһәң, эшләргә лә, эшләргә кәрәк!

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда ҡырау ауыл хужалығы культураларына кире йоғонто яһаған. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов килтергән яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, һауа температураһының түбәнәйеүе һөҙөмтәһендә 13 мең гектар сәсеүлек зыян күргән. Башлыса күп йыллыҡ үләндәр һәм иртә яҙғы культуралар (етен, көнбағыш). Бынан тыш, 525 гектар сөгөлдөр, 164 гектар рапс һәм 100 гектар көнбағыш һәләк булған, сәсеүлектәрҙе тикшереү дауам итә.

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә 9 майҙа "Газпром нефтехим Салауат" предприятиеһына һәм беҙҙең республикаға пилотһыҙ осоу аппараты һөжүм итеүе тураһында хәтергә төшөрҙө. "Күп планлы оборона системаһы ҙур зыян килтереүгә юл ҡуймаңы. 10 майҙа Салауатта оператив штаб ултырышында һауа һөжүменә ҡаршы оборонаны, ғөмүмән, иҡтисадыбыҙ өсөн үтә мөһим булған предприятиеларыбыҙҙы обороналауҙы көсәйтеү тураһында һөйләшеп килештек", - тине Радий Хәбиров.

✓Оборона министры Сергей Шойгу Владимир Путиндың указы менән Именлек советы секретары итеп тәғәйенләнде, тип хәбәр итте Президенттың матбуғат секретары Дмитрий Песков. Именлек советының ғәмәлдәге секретары Николай Патрушев, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, секретарь вазифаһынан бушатылды. Путиндың Федерация Советына ҡарауға тәҡдим иткән кандидатуралар исемлегендә оборона министры итеп беренсе вице-премьер вазифаһын башҡарыусы Андрей Белоусовты күрһәтеүе билдәле булды. Бынан алдағы составта ул социаль-иҡтисади блок өсөн яуаплы ине.

✓Мәскәүҙә Енеү музейында Халыҡ-ара дөрөҫ кино фестиваленең иң яҡшы эштәре иғлан ителде. Улар араһында Өфөлә "Муха" студияһы төшөргән йәнһүрәт тә бар. Уларҙың "Төньяҡ амурҙары" "Иң яҡшы анимация фильмы" номинацияһында еңеп сыҡты, тип хәбәр итә федераль киң мәғлүмәт саралары. Хәбәр иткәнебеҙсә, башҡорт яугирҙарының 1812 йылғы һуғышта ҡатнашыуы хаҡындағы йәнһүрәт биш көн эсендә прокатта 3,5 миллион һум аҡса йыйған.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

**Рәсәй иленең һуңғы осорҙарҙа үткән аҙналағы кеүек бөтөн донъя иғтибары үҙәгендә торған мәле тағы ла ҡасан булды икән? Эйе, Махсус хәрби операция иғлан ителеүе, һуңынан шуға бәйле ваҡиғалар теҙмәһе, Көнбайыштың туктауһыҙ санкциялары - бөтәһе лә булды, ләкин был юлы иғтибар бөтөнләй икенсе сифатта һәм кимәлдә ине: беҙгә дуҫ булмаған ҡайһы бер сит илдәр Владимир Путиндың инаугурацияһы менән Ҡыҙыл майҙандағы Бөйөк Еңеү парадын ҙур ҡыҙыҡһыныу ҡатыш көнсөллөк, хатта ки үсле бер агрессив тойғо менән күҙәтте, бәғзеләре был фактты күрәләтә ҡабул итмәҫкә, һанламаҫҡа маташты; тантанала ҡатнашырға тейешле беҙҙәге илселәрен саҡыртып алды.**



# КЕМ ҠЫЛЫС МЕНӘН КИЛӘ...

Ләкин быйндайҙар бөтөн Европаны көүҙәләндермәй бөгөн, Рәсәйгә теләктәшлек белдереүселәр ҙә бар. Евросоюз менән НАТО-ла сәйәси үҙаллылыҡ һаҡлап ҡалыусы Венгрия менән Словакия, мәҫәлән, Киев режимын күтәрмәләүгә асыҡтан-асыҡ ҡаршылыҡ күрһәтә, һәм илселәрен Кремлгә ебәреүҙән бер ҙә ҡурҡып торманылар. Улар сафындағы Мәскәү ҡунаҡтары араһында тағы ла элекке БДБ илдәре Беларусь, Ҡаҙағстан, Тажикстан етәкселәренән тыш, Израиль, Көньяҡ Корея, Корея Демократик Халыҡ Республикаһы (КХДР), Катар, Пакистан, Мальта, Греция һәм, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, Франциянан вәкилдәр килде. Шул уҡ ваҡытта саҡырыуҙан баш тартып, вәкилдәр ебәрмәйенсә, АҠШ, Британия, Канада, Германия кеүек илдәр бер ыңғайҙан куҙмә-күҙ күрешеп, үҙ-ара аңлашыу, һөйләшеү мөмкинлегенән үҙҙәрен үҙҙәре мәхрүм иттеләр. Әйткәндәй, саҡырыуҙы ҡабул итеү дипломатик йөҙ һаҡлау һәм әҙәплелек күренеше генә түгел ине бит, ә бындай осраҡта ҡатнашыу - ул мотлаҡ булған халыҡ-ара илселек бурысы, дипломатия законын һаҡлау ҙа ине.

РФ Президенты Владимир Путиндың бишенсе мөҙҙәткә власть башына килеүен донъя киң мәғлүмәт саралары ниндәй кимәлдә яҡтыртты һуң? АҠШ мәғлүмәт саралары һөйләй: ***The Washington Post*** гәзите: "МХО-ға бәйле оптимизм күрһәтеп, Путин Рәсәй хәүефһеҙлеген тәүге урынға ҡуйыуын белдерҙе һәм илебеҙ еңәсәк, тип вәғәҙәләне..."

***Associated Press*** агентлығы: "Путин үҙенең бишенсе президентлыҡ мөҙҙәтен ил эсендә оппозиция булмаған шарттарҙа башлай..."

***NBC News*** телеканалы: "Рәсәй лидерының үҙ илендә дошмандары әҙ ҡалды. Тантананан һуң хөкүмәт составында үҙгәрештәр буласаҡ, тип көтөлә..."

Испания, ***La Razon*** гәзите: "Төрлө фараздарға ҡарамаҫтан, Кремль ант биреү тантанаһына дуҫ булмаған илдәр дипломаттарын да саҡырҙы, ләкин АҠШ менән Евросоюздың күпселек илдәре саҡырыуҙы ҡабул итмәне..."

Чехия, ***Blesk.cz*** порталы: "Инаугурация Рәсәйҙең Украинала өҫтөнлөк алған мәленә тура килде. Путин Рәсәйҙең әһәмиәтен нацистарҙы юҡ итеү миссияһын башҡарыусы һәм "халыҡтарҙы ҡотҡарыусы милләт" булараҡ күрһәтергә теләй. Бының менән ул МХО-ның дауам ителәсәгенә ишаралай..."

Австрия, ***Die Presse*** гәзите: "Путиндың маҡсаты - фронтта һәм хәрби заводтарҙа үҙҙәрен Тыуған илен һаҡлауға бағышлаған кешеләрҙән "яңы элита" яһау..."

Бөйөк Британия, ***The Time*** гәзите: "Путиндың ант итеү тантанаһында Кремль ишектәренән килеп ингәнен ҡаршылаған сәйәси һәм дини элита Президент йөҙөндә Рәсәйҙең тере сағылышын күрҙе..."

Германия, ***Die Welt*** гәзите: "Көнбайышта күптәрҙең, Украиналағы ниәттәре барып сыҡмаҫ, тип өмөт итеүҙәренә ҡарамаҫтан, Путин иҫәбенең бойомға ашыуы бик ихтимал..."

***Der Spiegel*** журналы: "Тантаналы инаугурация Путиндың Рәсәйҙе ниндәй илгә әйләндереүен айырыуса асыҡ күрһәтте: сарала парад формаһындағы һәм миҙалдар таҡҡан бик күп хәрбиҙәр ҡатнашты..."

***Berliner Zeitung*** гәзите: "Үҙенең сығышында Кремль лидеры еңеүгә ышанысын тағы бер раҫланы..."

Сәғүд Ғәрәбстаны, ***Asharq al-Awsat*** гәзите: "Путин үҙ иленең биләмәләрен киңәйтеп, үҙенә тиклемге дәүләт етәкселәре тарафынан юғалтыуға дусар ителгән тарихи Рәсәй ерҙәрен кире ҡайтара башлаған тәүге лидер булды..."

Франция, ***Les Echos:*** "Владимир Путин Көнбайыш менән килешеү мөнәсәбәтенә ишара яһаны. Үҙенең телмәрендә ул "хәүефһеҙлек һәм стратегик тотороҡлолоҡ мәсьәләләре буйынса Көнбайыш менән фекер алышыуҙар мөмкинлеген белдерҙе".

Әйткәндәй, Францияның ***"Liberation"*** гәзите хәбәрсеһе Кремлдең Ҙур һарайы коридорынан килгән сағында Владимир Путиндың рус ерҙәре һаҡсыһы, кенәз Александр Невскийҙың ҡаһарманлыҡтары хаҡында һөйләүсе һәм "Кем беҙгә ҡылыс менән килә, шул ҡылыстан үҙе үлә" тип яҙылған монументаль полотно янынан үткәнен күрә. Был һүҙҙәрҙе Александр Невский (шул исемдәге фильмда) туған еребеҙҙе һаҡлап, шведтар менән Невала һәм Чуд күлендә тәре походында ҡатнашыусыларға ҡаршы һуғышҡанда әйтә. Эйе, Рәсәй ҙур һәм киң, ләкин уның артыҡ ере юҡ, ул - халыҡ байлығы. Әлеге ҡанатлы һүҙҙәр бөгөн дә бик көнүҙәк яңғырай һәм уның хаҡлығына, ғәҙеллегенә шик белдерергә йөрьәт иткән бер генә ил дә юҡ әле донъяла.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Алдаҡсылар заманында йәшәйбеҙ. Һинең улар тоҙағына эләккәнең булдымы?

***Рәүзәнә ХӘЛИЛОВА, Өфө ҡалаһы:*** Хәйләһеҙ донъя - файҙаһыҙ, тип әйтергә ярата минең бер танышым. Ул сауҙа менән шөғөлләнә, үҙенең бәләкәй генә һатыу нөктәһе бар. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында башлағайны, әле һаман шул эше менән шөғөлләнә. Эшҡыуар тип әйтә алмайым мин уны, алыпһатар тиһәң, дөрөҫөрәк булыр. Яҙҙырыпмы, барыпмы, ҡайҙандыр арзанырак хаҡҡа ала ла, шуға хаҡ өҫтәп һата. Шуның һөйләгәне хәтерҙә: "Көнөнә бер генә кешене булһа ла алдамаһам, көнөм буш үткән һымаҡ", ти торғайны. Йәғни, өйөнә ҡайтҡан икмәк менән һөттөң булһа ла хаҡын алдап ала. Ғүмер буйы шулай эшләй, тик бер ҙә башҡа кешеләрҙән байыраҡ, етешерәк йәшәгән һымаҡ күрмәйем мин уны. Дөрөҫөрәге, һатыусы ялларға ла аҡсаһы юҡ уның. Минең уйлауымса, тап ана шул кеше өлөшөнә ингәне өсөн эше бар ҡеүәткә үҫеп китә алманы. Үсәгәндән әйтмәйем, ярлы-ябағаны алдағанына асыуым килгәнгә әйтәм.

Шуға ла үҙе лә мутлашыусылар ҡорбаны булғаны бар. Былтыр газовикмы, әллә һыу приборҙарын тикшереүсе булыпмы, кемдәрҙер килеп, уның сумкаһынан банк картаһын урлағайнылар.

Социаль хеҙмәттән тип, миңә лә ике ҡатын ингәне бар. "Һеҙгә бер ниндәй үтенесем дә, һорауым да юҡ, мин һеҙҙе саҡырманым", тип торһам да, өйгә инеп килә былар. Фатир ишеге ябылыу менән береһе йүткереп, сәсәп киткән булды, һыу һораны. Ишек төбөндә тумбочка өҫтөндә минераль һыу ултыра ине, шуны ҡойоп биргәйнем, "Магазин һыуы эсмәйем, крандан ғына ағыҙып бирһәгеҙсе", ти был. Икенсеһенең теле телгә йоҡмай, ниндәйҙер өҫтәмә түләүҙәр, һандар менән башты бутай. Шул ваҡыт, үҙ өйөмдә булһам да, мине ниндәйҙер ҡурҡыу хисе биләп алды. Паникаға бирелеү бик насар бит ул. Был икәү иһә бик яҡшы психолог булып сыҡты. Нимә менән булып бөтөр ине, кем белә уларҙың уйында нимә булғанын, ейәнем килеп инде. Уның менән хәл-әхүәл һорашҡансы, был ике ҡатындан елдәр иҫкәйне.

Енәйәтселәр торлаҡ-коммуналь хужалыҡ вәкиле булып та килеүҙәре ихтимал. Шулай уҡ мутлашыусылар кешеләрҙең социаль селтәрҙәге сәхифәләренә инеп, аҡса һорап мөрәжәғәт итә. Минең бер туған ҡустым да улар ҡорбаны булды. Класташы булып "Бәйләнештә" селтәрендә 150 мең һум һорап смс ебәргәндәр. Уны-быны һорашып тормаған, ебәргән дә ҡуйған. Тоҙаҡҡа эләккәнен икенсе аҙнаһына ғына белде. Шуға күрә, тәүҙә танышығыҙ телефонына шылтыратып, уға ярҙам ысынлап та кәрәкме-юҡмы икәнен асыҡлағыҙ.

Уяу булайыҡ, хоҡуҡ һаҡлау органдарына енәйәтселәрҙе тоторға ярҙам итәйек, яҡындарыбыҙҙы, ололарҙы муттар тоҙағынанан аралайыҡ.

**Ләйсән СӘЛИХОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ҡыйғы районы хакимиәте етәксеһе Зөһрә Гордиенко республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Депутаттар советы Ҡыйғы районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп Руслан Вәхитовты тәғәйенләне. Быға тиклем ул төҙөлөш һәм йәшәйеште тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса беренсе урынбаҫар вазифаһын биләй ине.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы 13 майҙан 19-на тиклем "Сәләмәтлек поездары" хәрәкәте графигын баҫтырып сығарҙы. Улар алты маршрут буйынса йөрөй һәм республиканың алыҫ ауылдарында йәшәгән халыҡты бушлай тикшерә. Был аҙнала табиптар Белорет, Дыуан, Дүртөйлө, Бүздәк, Әлшәй, Шишмә, Архангел райондары ауылдарында эшләй. "Сәләмәтлек поездары" составында Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының, Республика кардиология үҙәгенең диагностика үҙәктәре, маммографтар, флюорографтар, шулай уҡ махсус белгес-табиптар бригадалары эшләй.

✓Әбйәлил районында 23-25 майҙа, "Урал аръяғы" Бөтә Рәсәй инвестиция форумының һуңғы көнөндә, яҙғы Һабантуй була. Байрам программаһында - быуындан-быуынға тапшырыла килгән бик күп боронғо йолалар һәм ғөрөф-ғәҙәттәр. Шулай уҡ милли йыр-моң тыңларға, халыҡ бейеүҙәрен ҡарарға, башҡорт аш-һыуҙары менән һыйланырға мөмкин. Һабантуйҙа төрлө спорт ярыштары үткәреү ҡаралған.

✓Республика Башлығы Радий Хәбировтың тейешле указына ярашлы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы 2024 йылда ойошманың 90 йыллығын билдәләй (1934 йылда ойошторолған). Юбилей саралары 24-26 майҙа "Китап-байрам" халыҡ-ара китап йәрминкәһе барышында ойошторола. Беренсе көндө Рәсәй Яҙыусылар союзының пленумы була. Бөгөн "Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы" төбәк йәмәғәт ойошмаһының 292 ағзаһы бар.

✓Любовь Минакова Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде, быға тиклем ул ведомство етәксеһе урынбаҫары вазифаһын биләне, тип хәбәр иттеләр Хөкүмәттең матбуғат хеҙмәтенән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, юл хужалығы министры Александр Клебановтың ҡулға алыныуы тураһында билдәле булды. Ул айырыуса ҙур күләмдә ришүәт алыуҙа ғәйепләнә. Башҡортостан Башлығы чиновникты биләгән вазифаһынан бушатыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы.

✓ *Донбаста ла мосолмандар йәшәй, улар беҙҙең башлаған эште хуплай. Урындағы халыҡтың тыныс тормошон тәҙөләгән беҙҙе мән ҡыуанып ҡабул итеүен күреүе бик күңелле булды. Беҙгә урындағы дин әһелдәре килә.*



ҠЫҪҠАСА

# ХӨКҮМӘТ ЯҢЫРҘЫ

**Дәүләт Думаһы Рәсәй Хөкүмәтенең премьер-министр урынбаҫарҙары кандидатураларын раҫланы, тип хәбәр итә федераль киң мәғлүмәт саралары. Улар унау: етәүһе үҙ вазифаһын һаҡлап ҡалды, өсәүһе - яңы кешеләр.** Денис Мантуров беренсе вице-премьер вазифаһына тәғәйенләнде. Ул сәнәғәт һәм сауҙа министры вазифаһын бушатты, уның урынына Калининград өлкәһе губернаторы Антон Алиханов тәҡдим ителде. Хөкүмәт рәйесенең икенсе яңы урынбаҫары - ауыл хужалығы министры булып эшләгән Дмитрий Патрушев, ә үҙенең урынына урынбаҫары Оксана Лутты ҡалдыра. Хөкүмәттә өсөнсө яңы кеше - транспорт министры вазифаһын биләгән Виталий Савельев. Уның вазифаһына Хабаровск крайы губернаторы Михаил Дегтярёв тәҡдим ителә. Башҡа ете вице-премьер: Татьяна Голикова, Марат Хуснуллин, Дмитрий Чернышенко, Дмитрий Григоренко, Александр Новак, Алексей Овчарук, Юрий Трутнев үҙ вазифаларын һаҡлап ҡалды.

✓ **Башҡортостан төҙөкләндереү кимәле буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы төбәктәре иҫәбенә инә.** Был хаҡта Башҡортостан юлдаш телеканалының "Честно говоря" тапшырыуында Дәүләт Думаһы депутаты, төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Павел Качкаев белдерҙе. "Бөгөн республика Башҡортостан Башлығы ҡарары буйынса төҙөкләндереүгә (шул уҡ ҡыйыҡтар, подъездар) бик күп көс һала. Илдә бындай төбәктәр аҙ. Беҙ ҡала мөхите буйынса алдынғы өсәү-бишәү иҫәбендә - Мәскәү өлкәһе һәм башҡалар менән бергә", - тине спикер. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбиров тәҡдим иткән "Башҡорт ихаталары" программаһы буйынса 2019 йылдан 1326 ихата биләмәһе төҙөкләндерелгән. Ошо маҡсатҡа биш йылда 6,2 миллиард һумдан ашыу бюджет аҡсаһы йүнәлтелгән. Йыл һайын төҙөкләндереү халыҡтың йәшәү сифатын яҡшыртырға мөмкинлек бирә, атап әйткәндә, 2023 йылда - 50 мең, ә программа ғәмәлгә ашырыла башлағандан алып 400 меңдән ашыу кеше уның һөҙөмтәһен тойған.

✓ **Башҡортостанда балалар баҡсаһына түләү тағы ла артты. Мәғлүмәт БР хоҡуҡи мәғлүмәт рәсми интернет-порталында баҫылған.** Документҡа ярашлы, муниципаль мәктәпкәсә балалар учреждениеларында ата-әсә түләүе күләменең иң юғарыһы - Өфөлә. Ул көнөнә 178 һум һәм былтырғы ҡарағанда 8 һумға ҡиммәтерәк. Икенсе урында Өфө районы - 175 һум. Стәрлетамаҡ ҡалаһында түләү 171 һум тәшкил итә. Иң түбән хаҡты Әбйәлил халҡы түләй - 133 һум. Балалар баҡсаһы өсөн түләү күләмен муниципаль берләшмәләр хакимиәттәре билдәләй. Ул республика Хөкүмәте ҡарары менән билдәләнгән максималь хаҡтан юғары булырға тейеш түгел. Был норматив акт йыл һайын яңынан ҡарала, ҡулланыусылар хаҡы индексына ярашлы, балалар баҡсаһы өсөн түләү ҙә арта. Түләүҙән инвалид балалар тәрбиәләгән ата-әсәләр, етем балаларҙың законлы вәкилдәре, шулай уҡ мобилизацияға эләгеүселәрҙең балалары азат ителгән. 50 процентлыҡ ташлама аҙ тәьмин ителгән һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ҡаралған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҢ САҒЫУ МАЙҘАНСЫҠТА

**14 майҙа Өфөлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Валдай" халыҡ-ара дискуссия клубының IV Үҙәк Азия конференцияһын асыуҙа ҡатнашты.**

Валдай клубы конференцияһы - Үҙәк Азия алдында торған халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙе баһалау өсөн иң сағыу интеллектуаль майҙансыҡ. Быйыл Өфө Рәсәй, Һиндостан, Ҡаҙағстан, Ҡытай, Ҡырғыҙстан, Тажикистан һәм Үзбәкстан экспертарын ҡабул итә. Быйылғы конференцияның темаһы - "Рәсәй һәм Үҙәк Азия: үҙгәреүсе донъя ысынбарлығында үҫеш һәм хәүефһеҙлек". Ике тиҫтә йыл инде "Валдай" дискуссия клубы халыҡ-ара сәйәсәт һәм глобаль хәүефһеҙлектең төп мәсьәләләрен тикшереү өсөн донъяның алдынғы экспертарын берләштерә, тип билдәләне республика Башлығы. Уның фекеренсә, Өфө конференцияны үткәреү урыны булараҡ осраҡлы һайланмаған. Европа менән Азияның тоташтырған Башҡортостан быуаттар дауамында күп кенә ултыраҡ һәм күсмә халыҡтарҙың, уларҙың телдәре һәм мәҙәниәттәренең киҫешкән урыны булған. Бында Алтын Урҙа осоронда сауҙа туҡталҡалары һәм Волга Болгарияһынан Урта Азияға һәм Себергә каруан юлдары үткән.

Радий Хәбиров әле республикала боронғо тарихтың билдәле ҡомартҡылары урынлашҡан биләмәлә Евразия күсмә цивилизациялар музейы төҙөләүе, шулай уҡ республикала милләт-ара дуҫлыҡ шарттары хаҡында һөйләне: "Беләһегеҙме, беҙ әйләнештән "түҙемле булыу" тигәнде аңлатҡан "толерантлыҡ" һүҙен алып ташланыҡ. Башҡортостанда кешеләр бер-береһенә түҙеп тороуҙың мәжбүри кәрәклеген ҡабул итмәй. Беҙҙә башҡорттар, урыҫтар, татарҙар, мариҙар, сыуаштар, православие динендәгеләр, мосолмандар, йәһүдтәр - барыһы ла бала саҡтан дуҫ. Бергә үҫәләр, уҡыйҙар, эшләйҙәр, өйләнешәләр, ҡатнаш ғаиләләр төҙөйҙәр", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостанда күп телле мөхит булдырылған. Балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә уҡытыу 6 телдә алып барыла, 13-ө туған тел булараҡ өйрәнелә. Республикала 8 полилингваль мәктәп булдырылған, унда балалар бер юлы бер нисә телдә уҡый һәм өйрәнә.

Республика Үҙәк Азия илдәре менән берлектә иҡтисади һәм гуманитар проекттарҙы тормошҡа ашыра, тип билдәләне Радий Хәбиров. Һөҙөмтәлә Былтыр Үҙәк Азия илдәре менән тауар әйләнеше 9 процентҡа артҡан. Бөгөн йөҙҙән ашыу дәүләт-сауҙа партнерҙары араһында уларҙың өлөшө тышҡы сауҙа әйләнешебеҙ дөйөм күләменең дүрттән бер өлөшөнә етте. Конференцияла ҡатнашыусыларға республика Башлығы Өфө рәссамы Александр Скорняковтың картинаһы хаҡында һөйләне. Ул "Доға ҡыл, ағай, мин яҡлаясаҡмын" тип атала. "Мин уны Рәсәй Президенты Владимир Владимирович Путинға беҙҙең осрашыу ваҡытында күрһәттем. Сөнки уны Махсус хәрби операцияһында бик тә мөһим булған дуҫлыҡ һәм бергә эш итеүҙең ысын символы тип иҫәпләйем, Яугирҙарыбыҙ тап шулай һуғыша", - тине Радий Хәбиров. Республика Башлығы конференцияла ҡатнашыусыларҙы көҙөн Өфөлә үтәсәк Рәсәй менән Ҡаҙағстандың 20-се төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумына саҡырҙы.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# УНДА ЛА МӘСЕТ ТӨҘӨЛӘ

**Салауат Юлаев исемендәге башҡорт ирекле батальоны яугирҙары Донецк Халыҡ Республикаһында мәсет төҙөй. Хәрбиҙәрҙең башланғысы тураһында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына Башҡортостан Башлығының Рәсәй милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү буйынса Артур Йомағужин хәбәр итте.**

Командирҙың "Амин" позывнойлы сәйәси эштәр буйынса урынбаҫары, батальон имамы әйтеүенсә, яугирҙар Махсус хәрби операция зонаһында урындағы мәсеттәргә иркенләп йөрөй алмай. Шуға күрә үҙҙәренә мәсет төҙөргә тигән ҡарарға килгән. Башҡорт яугирҙарының башланғысы урындағы халыҡты дәртләндерҙе, тип билдәләне Артур Йомағужин. Уларҙың күптәре изге ғәмәлгә ҡушылған. Мәсетте 16 июнда - Ҡорбан байрамында асыу көтөлә. "Донбаста ла мосолмандар йәшәй, улар беҙҙең башлаған эште хуплай. Урындағы халыҡтың тыныс төҙөлөштә ҡыуанып ҡабул итеүен күреүе бик күңелле булды. Беҙгә урындағы дин әһелдәре килә. Улар имамыбыҙ һәм христиандарҙың дин әһеле менән тығыҙ аралаша. Бер-береһе менән мәсетте нисегерәк һалыу тураһында кәңәшләшәләр. Шул рәүешле беҙ Башҡортостанда ғына түгел, яугирҙарыбыҙ хеҙмәт иткән Махсус хәрби операция зонаһында ла мосолмандар менән христиандарҙың үҙ-ара дуҫ йәшәүенә тағы бер тапҡыр инанабыҙ", - тип билдәләне Артур Йомағужин.

Республика етәксеһе Радий Хәбиров менән килешеү буйынса Башҡортостандан ҡарағай бүрәнәләре, таҡталар һәм бурсалар килтерелгән. Шулай уҡ республикабыҙҙың төҙөлөш материалы Донецк Халыҡ Республикаһында Табыну өсөн тәре төҙөүҙә ҡулланылған. Уны "юлаевсылар" мәсет урынынан 300 метр алыҫлыҡта ҡуйған.

# КҮРГӘҘМӘГӘ КИЛ!

**Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡульяҙмалар һәм һирәк баҫмалар бүлеге Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 79 йыллығына арналған "Хәтерҙә мәңгелек һаҡланһын" күргәҙмәһенә саҡыра.**

Күргәҙмә башҡорт фронтовик яҙыусыларының Бөйөк Ватан һуғышы башланыр алдынан ғәрәп һәм латин графикаһында донъя күргән китаптарынан төҙөлгән. Һуғыш башланғас та бик күп башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары фронтҡа киткән. Уларҙың 20-һе "үҙҙәренең уй-хыялдарын тормошҡа ашырып, төп китаптарын яҙып өлгөрмәйенсә, яу яланында батырҙарса һәләк булған". Талантлы йәш яҙыусылар һәм шағирҙар Хәй Мөхәмәтйәров, Али Карнай, Мәзһар Абдуллин, Сәғит Мифтахов, Мәлих Харис, Ҡунаҡбай Хөсәйен, Төхвәт Морат, Бәҙрүш Моҡамай, Ғайса Йософов, Низам Ҡәрип, Зиннәт Ҡотоп, Сабир Кинйәкәй, Хөрмәт Хәйри, Зәфәр Мансуров, Сынғыҙ Ханов, Фазыл Хәбир, Әхмәт Шакири, Ғәли Әхмәти, Ғәмир Дәүләтшин, Мөжәй Хәйретдинов Тыуған илебеҙҙе яҡлап башын һалған.

Милли китапхананың ҡульяҙмалар һәм һирәк баҫмалар фондында һәләк булған йәш яҙыусыларҙың 30-40-сы йылдарҙа латин графикаһында нәшер ителгән тәүге һәм һуңғы китаптары һаҡлана. Яуҙан яраланып һәм төрлө наградалар менән ҡайтҡан 30 башҡорт яҙыусыһы гәзит-журналдарҙа эшләүен дауам иткән. Һалдат шинелдәрен кейгән яҙыусылар: Мостай Кәрим, Ҡадир Даян, Муса Ғәли, Шәриф Биҡҡол, Хәниф Кәрим, Яныбай Хамматов, Назар Нәжми, Нәжиб Иҙелбай, Рамазан Өмөтбаев, Шакир Янбаев, Ғилемдар Рамазанов, Әхиәр Хәкимов, Сәләх Кулибай, Ғәли Ибраһимов, Ғабдулла Байбурин, Әнүәр Бикчәнтәев, Динис Исламов халыҡҡа һуғыш һәм еңеү тураһында хәҡиҡәтте еткерә. Һуғыштан һуң улар яҙыусылыҡ эше менән шөғөлләнә, гәзит һәм журналдарҙа хәбәрсе, мөхәррир булып эшләй. М.Кәрим, Ә.Бикчәнтәев, Ғ.Ибраһимов, Х.Кәрим, М.Ғәли кеүек күренекле фронтовик яҙыусыларҙың китаптары һәм әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән. Күргәҙмәлә уларҙың һуғыш башланғансы донъя күргән беренсе йыйынтыҡтары, шулай уҡ авторҙарҙың автографтары менән китаптар бар.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында Башҡортостан Башлығы Өфөнөң Ленин исемендәге паркын төҙөкләндереү тураһында әйтте. Эштәрҙе быйыл уҡ башларға йыйыналар. Радий Хәбиров ял итеү урынын күркәмләндереү йүнәтенән баш ҡала халҡы менән кәңәшләшергә ҡушты. "Иң мөһиме - яҡшы концепция уйлап, фекер алышыуға сығарыу. Сөнки кешеләр һәр ағас һәм таш өсөн һораясаҡ, сөнки был - үҙәк парк", - тип билдәләне республика етәксеһе.

✓Башҡортостанда 7 майҙан Өфөнөн Кемеров өлкәһенә рейстар арттырылды. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, хәҙер республикала йәшәүселәр Кузбасҡа аҙнаһына ике тапҡыр - шишәмбе һәм шәмбе көндәрендә оса ала. Билдәле булыуынса, юлға өс сәғәткә яҡын ваҡыт кәрәк. Пассажирҙарҙы илебеҙҙә етештерелгән Sukhoi Superjet 100 самолеттары хеҙмәтләндерә. Бынан алдараҡ Өфөнән Дағстанға авиаосоштар арттырылды.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостан Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығына "Алға" махсус иҡтисади зонаһы майҙанын арттырыу өсөн ғариза әҙерләй. Атап әйткәндә, Өфө районындағы 5-се майҙансыҡты киңәйтеү тураһында һүҙ бара, ошо маҡсатҡа 4 төп инвестиция проекты һайлап алынған. Ике компания проекттарҙың финанс моделдәрен һәм паспорттарын тәҡдим иткән. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев хәбәр итте.

✓Өфө үҙәгендә, "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы эргәһендә, яңы сквер барлыҡҡа киләсәк. Сквер "Ете" тип аталасаҡ һәм башҡорт ерененң тарихына бәйле буласаҡ. Объект концепцияһын бойомға ашырғанда һәр деталгә иғтибар биреләсәк, сәнғәт белгестәре һәм тарихсылар менән кәңәшләшеү ҙә ҡуҙҙә тотола. Әлеге ваҡытта буласаҡ сквер урынында юлдар төҙөкләндерелә. Бәләкәй архитектура формалары заказға ярашлы эшләнә башлаған, тип хәбәр итә Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Совет майҙанында әҙәбиәт донъяһына мауыҡтырғыс сәйәхәт көтә. Сараға килеүселәр, әҙәбиәттең төрлө дәүерҙәре һәм жанрҙары донъяһына сумып, рус яҙыусылары һәм Башҡортостан әҙиптәренең ижад юлына байҡау яһай аласаҡ.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# КҮРҺӘТЕРЛЕК УРЫНДАР БАР!

**Валдай клубының Үҙәк Азия конференцияһы ваҡытында эксперттар Өфөләге Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең студенттар кампусын барып күрҙе. Был кампустың бер өлөшө 1 февралдә асылғайны.**

Рәсәй, Һиндостан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан һәм Үзбәкстан илдәре ғалимдарынан торған эксперттарға 6 вуз, 3 ғилми учреждение һәм 30 индустриаль партнерҙы берләштергән Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең ҡеүәте күрһәтелде. Әлеге ваҡытта кампустың 103 кв. метрлыҡ сираттағы өлөшө төҙөлеп бөтөп килә. "Өфө берҙәм Евразия арауығының үҙәгендә урынлашҡан һәм үҙендә Европа менән Азия донъяһының бик күп асылдарын берләштергән. Үҙәк Азия конференцияһы - клубтың иң алдынғы проекттарының береһе. Ҡатнашыусылар Рәсәй һәм Үҙәк Азия илдәре араһындағы мөнәсәбәттәр, хәүефһеҙлек өлкәһендәге хеҙмәттәшлек мәсьәләләрен тикшерә. Һуңғы ике йылда иҡтисади бәйләнештәр ҙә үҫешә, шуға бында Башҡортостандың тотҡан урыны тураһында ла фекер алышына. Климат үҙгәреүе, һыу менән тәьмин итеү кеүек мәсьәләләр ҙә көнүҙәктә", - тине Валдай клубының программа директоры, Юғары иҡтисад мәктәбе ғалимы Тимофей Бордачев.

Ҡунаҡтар шулай уҡ Археология һәм этнография музейында ла булды. Унда улар 36 йыл элек Филиппов ҡурғандарында табылған алтын әйберҙәрҙән торған "Сарматтар алтыны" күргәҙмәһе менән танышты.

# ШТАБ-ФАТИР - БЕҘҘӘ!

**Өфөнөң Вуз-ара студенттар кампусында ЮНЕСКО-ның "Геопарктар - тотороҡло үҫеш биләмәләре" кафедраһы булдырыла.**

Уны "Янғантау" геопаркы менән берлектә Өфө фән һәм технологиялар университеты ойоштора. Кафедра Рәсәйҙә һәм Үҙәк Азияла геопарк белгестәре компетенцияһы үҙәгенә әүерелер тип күҙаллана. Ул апрелдә "ЮНЕСКО-ның глобаль геопарктары: идеянан алып тормошҡа ашырыуға тиклем" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында тәҡдим ителгән Евразия геопарктар ассоциацияһын квалификацияла кадрҙар менән тәьмин итергә тейеш, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Шулай итеп, Башҡортостан "Янғантау" (Башҡортостан Республикаһы), "Ундория" (Ульяновск өлкәһе), Ҡырғыҙстандың Мадыген, Тескей һәм Тянь-Шань, Үзбәкстандың, Ҡаҙағстандың геопарктары ингән Евразия селтәре үҙәге булмаҡсы. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Евразия ассоциацияһының штаб-фатиры "Янғантау"ҙа урынлаша. Евразияла геопарктарға ҡараштың төп үҙенсәлеге - кешелек капиталына баҫым яһауҙа.

# ЯҢЫ ЭШ УРЫНЫМЫ?

**"Алға" махсус иҡтисади зонаһында яңы резидент теркәлгән - "Поревит. Өфө", тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.**

Предприятие 137 яңы эш урыны булдырыуҙы күҙ уңында тота. Проектҡа инвестициялар күләме - 2,4 миллиард һум. "Алға" махсус иҡтисади зонаһында инвестор илебеҙҙә тротуар плиткалары, бордюрҙар һәм түҙәкләндереү өсөн башҡа материалдар етештереүҙе үҫтерергә ниәтләй. Әле инвестор менән берлектә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөлөш-монтаж эштәренә тотоноу өсөн ойоштороу мәсьәләләре өйрәнелә. "Поревит. Өфө" компанияһы "Алға" махсус иҡтисади зонаһының 22-се резиденты булды. Әлеге ваҡытта барлыҡ резиденттарҙың дөйөм күрһәтелгән инвестициялар күләме яҡынса 65 миллиард һумға етә.

# КИТАП БАЙРАМЫНА КИЛЕГЕҘ!

**Өфөлә 24-26 майҙа - өс көн дауамында "Китап байрамы" халыҡ-ара йәрминкәһе уҙасаҡ.**

- Совет майҙанында Өфө халҡын һәм баш ҡала ҡунаҡтарын әҙәбиәт донъяһына мауыҡтырғыс сәйәхәт көтә. Сараға килеүселәр, әҙәбиәттең төрлө дәүерҙәре һәм жанрҙары донъяһына сумып, бөйөк рус яҙыусылары һәм Башҡортостан әҙиптәренең ижад юлына байҡау яһай аласаҡ.
- Китап йәрминкәһенә килеүселәр шәхси китапханаһын байытыу, билдәле шағир һәм яҙыусылар менән аралашыу, йәш авторҙар ижады менән танышыу мөмкинлегенә эйә.
- "Китап байрамы"нда билдәле яҙыусылар Дарья Донцова һәм Олег Рой, театр һәм кино актеры Александр Олешко, билдәле алып барыусы Оксана Федорова һәм башҡа ҡунаҡтарҙың ҡатнашыуы көтөлә.
- Фестиваль майҙансығында Александр Пушкин, Сергей Аксаков, Мостай Кәрим, Мәжит Ғафури, Раил Бикбаев, Рәшит Шәкүр, Гөлфиә Юнысова һәм башҡа күренекле шағир-яҙыусыларҙың ижад юлына арналған күргәҙмәләр ойоштороласаҡ.
- Иң йәш китап һөйөүселәр өсөн "Уҡы! Өйрән! Сағыу йәшә!" исемле балалар әҙәбиәте фестивале ойошторола. Уның маҡсаты - ижади саралар һәм осталыҡ дәрестәре аша балаларҙа китап уҡыуға һөйөү тәрбиәләү.
- Байрамдың программаһы бай йөкмәткеле һәм төплө уйланылған. Был көндәрҙә Совет майҙанына килеүсе һәр кем күңеленә хуш килерлек майҙансыҡ таба алыр, тип көтөлә.
- Сара Башҡортостандың Яҙыусылар союзы инициативаһы буйынса республика Башлығы Радий Хәбиров һәм төбәк Хөкүмәте ярҙамы менән уҙғарыла.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ӘЛИБАЕВ СӘҒИТ РӘХМӘТ УЛЫ

СССР-ҙың партия һәм дәүләт эшмәкәре, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы комиссары, ғалим-педагог Сәғит Рәхмәт улы Әлибаев 1903 йылдың 23 ноябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ямантары ауылында тыуа (хәҙерге Башҡортостандың Көйөргәҙе районы). Ул бер нисә ауылдашы менән 1920 йылдың ғинуарында күрше Туғыҙтимер ауылында башланғыс мәктәптәр өсөн уҡытыусылар әҙерләү маҡсатында асылған өс йыллыҡ Сәйетҡол педагогия курстарына уҡырға йөрөй. Стамбул педагогия институтын һәм экстерн рәүештә Санкт-Петербург педагогия институтын тамамлаған уҡытыусы Хәбиб Зәйни тәҡдиме менән Ямантары ауылында педагогик курстарҙың башланғыс мәктәп базаһы асыла.

1926 йылда Ырымбур башҡорт педагогия техникумын тамамлай.

1926-1928 йылдарҙа БАССР-ҙың Йылайыр кантонында Баймаҡ һәм Мөхәмәтйәр мәктәптәре директоры була. 1929-1932 йылдарҙа "Ҡыҙыл Башҡортостан" гәзитенең мәҙәниәт бүлеге мөдире.

1932 йылда Н. К. Крупская исемендәге коммунистик тәрбиә академияһын тамамлай. 1932-1936 йылдарҙа Ырымбур башҡорт педагогия техникумы директоры була. Шул уҡ ваҡытта Ырымбур юғары коммунистик ауыл хужалығы мәктәбендә уҡыта.1936-1937 йылдарҙа ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ҡарамағындағы мәктәптәр бүлеге инструкторы.1937-1938 йылдарҙа - Башҡорт АССР-ы мәғариф халыҡ комиссары.

1941-1945 йй. - 112-се Башҡорт атлы дивизияһы комиссары, полк командирының сәйәси эштәр буйынса урынбаҫары.

1946-1954 йй. - Башҡорт АССР-ының мәғариф министры.

1954-1959 йй. - Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты директоры.

1959-1966 йй. - РСФСР Педагогия фәндәре академияһының Милли мәктәптәр ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалы директоры.

112-се Башҡорт атлы дивизияһының 1942 - 1943 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышы яуҙарында ҡатнашыуына арналған "Көндәлек биттәренән (Комиссар яҙмалары)" тигән китап авторы.

СССР-ҙың 1-се саҡырылыш Юғары Советы, Башҡорт АССР-ының 1-се һәм 2-се саҡырылыш Юғары Советы депутаты. 1974 йылдың 2 ғинуарында вафат була. Өфө ҡалаһының Мосолман зыяратында ерләнгән.

Көйөргәҙе районының Ямантары ауылында Сәғит Әлибаев урамы бар.

Маҡтаулы исемдәре һәм наградалары: РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы (1960); ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены (икеһе лә 1943); I (1945) һәм II (1943) дәрәжә Ватан һуғышы ордены; Ҡыҙыл Йондоҙ ордены (1943); Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены (1949).

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Лимон

❖ Иммун системаһын нығытыу өсөн 2 кг лимон, 3 кг сөгөлдөр, 3 кг кишер, 2 кг гранатты һут һыҡҡыс аша үткәрергә. Лимондың һөйәктәрен алырға, әммә ҡабығын ҡалдырырға. Гранатты шул көйө үткәрергә. Һутты банкаға ҡойоп, 2 кг бал өҫтәргә. Дауаны 1 ай дауамында иртәнсәк һәм йоҡларҙан алда 1-әр рюмка эсергә. Шунан 2 аҙнаға туҡтап торорға һәм киренән ҡабатларға. Был бигерәк тә яҙғыһын файҙалы.

❖ Яҙғыһын хәлһеҙлек тойғанда лимонға саҡ ҡына шәкәр һибеп, ҡабығы менән ашау файҙалы. Был зәңгә ауырыуынан да ярҙам итә.

### Һаҙ еләге

❖ Зәңге, нефрит ауырыуҙарынан көнөнә 1 стакан һаҙ еләге һутын эсергә.

❖ Цистит булғанда 1 ҡалаҡ ваҡланған һаҙ еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Йүнәлгәнсе көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан эсергә.

### Ҡаҙна ҡанаһа

❖ Теш ҡаҙнаһы ҡанағанда имән ҡайырыһы төнәтмәһе ярҙам итә. 1 ҡалаҡ имән ҡайырыһын эмалле һауытҡа һалып, 1 стакан һыу ҡойорға, ҡапҡас менән ябырға. Ҡайнап торған һыуҙың быуында 30 минут йылытырға, һөҙөргә һәм ҡайырын һығып алырға. Килеп сыҡҡан ҡайнатманың миҡдарын 1 стаканға тултырып һыу өҫтәргә. Шуның менән ауыҙҙы көнөнә 6-8 тапҡыр сайҡатырға.

### Гайморит

❖ 2 ҡалаҡ һарығүҙ (золототысячник) һәм 1 ҡалаҡ меңьяпраҡҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне танау аша һурып тамаҡты сайҡатырға. Дауаланыу - 3 көн. Был рәүешле дауаланғандан һуң танауҙың ике ҡыуышлығына ла әсе борос йәки аҡҡырҡа (чемерица белая) тамыры онтаҡтарын тығып, сөскөрөргә кәрәк. Эрен сөскөргән һайын тамсылап сыға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

## ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Һағыҙаҡ һары

**(Обыкновенный осоед)**



Уртаса ҙурлыҡтағы ҡош. Кәүҙәһе еңел, ҡанаттары, ҡойроғо оҙон, ҡойроғоноң осо түңәрәкләнеп тора. Оло ҡоштар тотошлай һоро йәки арҡаһы - һоро, ә күкрәк өлөшө аҡҡа һыҙаттар төшкән булыуы ихтимал. Һарға оҡшап тора, бары тик ҡанаттарының тарыраҡ булыуы һәм оҙон ҡойроғо менән айырыла. Яй оса, осҡан саҡта ҡанаттарын һирәк ҡаға.

Үҙәк Европанан Көнсығыш Себергә тиклем йәшәй. XIX быуат аҙағында - XX быуат башында Башҡортостанда ла йыш осраған ҡош була. Әлеге мәлдә иһә республика территорияһында һағыҙаҡ һарының оя ҡороп йәшәүе хаҡында бер мәғлүмәт тә юҡ. Шулай ҙа Бөрйән, Белорет ситендәге солоҡ ҡорттар булған ерҙә ҡайһы берҙә күренгеләгән. Тик башҡорт ерендә был ҡош башҡа оя ҡормайҙыр, тигән фекерҙәбеҙ. Шулай ҙа 2006 йылдың июлендә Балаҡатай районында бер пар һағыҙаҡ һарҙарын осратырға тура килде. Ырымбурҙа оя ҡора.

Һағыҙаҡ һары Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән, ул төбәк территорияһынан юғала барған ҡош төрө.

Евразияла оя ҡороп, ҡышлау өсөн Үҙәк Африкаға барып етә. Урманлы, урманлы-далалы ерҙәрҙе үҙ итә. Май аҙағында, июнь башында оя ҡора, уның шулай "һуңлап" китеүе бөжәктәрҙең күпләп үрсегән мәлдә "көтөүе" менән бәйле. Урман ситендәге ағастарҙы оя ҡороу өсөн ҡулайлы тип һанай. 1-2 йомортҡа һала. Ата менән инә ҡош икеүләп ай самаһы уларҙы баҫа. Бәпкәләр ояла 40-45 көн йәшәй, уларҙы башлыса инә ҡош туйындыра. Август урталарында иһә бала ҡоштар ояны ташлап осоп китә.

Энтомофаг, яры ҡанатлылар - бал ҡорттары, һағыҙаҡтар, ҡырмыҫҡалар, иңкештәр кеүек бөжәктәр һәм уларҙың бала ҡарышлауыҡтары менән туҡлана. Шулай уҡ рациондарында ҡарышлауыҡтар, эре бөжәктәр, саранча, ҡайһы берҙә тәлмәрйәндәр, сысҡан кеүек кимереүселәр осрай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

## ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ...

## ялған ҡиммәттәр ялмамаһын




**Онотманығыҙмы, элек 19 майҙа Пионерҙар көнөн билдәләй инек. Совет мәктәбендә белем алған кешеләр хәтерләйҙер: беҙҙең өсөн был көн оло байрам һанала ине. Ғәҙәттә, ул көндө уҡыуҙар булмай, бөтә мәктәп менән яланға сыға инек, төрлө уйындар, ярыштар ойошторола ине. Арыпталып, ләкин бик күтәренке кәйеф менән тарала инек беҙ был байрамдан.**

Совет мәктәбен нигеҙләүселәрҙең аҡылына, уйлап эш итә белеүенә һоҡланырлыҡ. Балаларҙы ойошмалар аша тәрбиәләүҙең күпкә һөҙөмтәлерәк икәнен аңлап, октябряттар, пионерҙар, комсомол ойошмалары булдырылған, ә иң мөһиме, тәрбиә нигеҙенә бөтә прогрессив кешелек тарафынан быуаттар дауамында булдырылған, кешелектең оҙайлы тарихында дөрөҫлөгө ҡат-ҡат раҫланған рухи ҡиммәттәр алынған. Мәғариф учреждениеларында уҡытыу, бөтә кластан тыш саралар тулыһынса ошо ҡиммәттәрҙең дөрөҫлөгөн, мөһимлеген раҫлауға йүнәлтелә ине.

90-сы йылдарҙан башлап, мәктәпкә, балалар баҡсаларына йәйләп ҡына Көнбайышта тамырланған беҙгә ят идеялар индерелә башланы, тәрбиә икенсе планға күсте. Һәм бөгөн беҙ уның һөҙөмтәләрен күрәбеҙ: матди байлыҡҡа өҫтөнлөк биргән, әхлаҡ нормаларын һанға һуҡмаған, оло-лаҙы ололай, кеселәргә кеселекле була белмәгән быуын үҫте. Ошо осорҙа тәрбиә алған ҡыҙҙар, егеттәр хәҙер үҙҙәре атай-әсәй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, улар араһында балаларҙы балалар баҡсаһы, мәктәп тәрбиәләргә тейеш, тип иҫәпләгәндәр, мәктәптәге тәрбиә мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһынмағандар ҙа бар. Ә шулай ҙа традицияларға тоғролоҡ һаҡлаған, кире үҙгәрештәргә бирешмәй, үҙ балаларына матур тәрбиә биргән ғаиләләр ҙә бихисап. Уларға ҡарап ҡыуанабыҙ ҡыуаныуға, әммә күңелде борсолоу ҙа ташламай: уларҙың балалары үҙ балаларын лайыҡлы быуын итеп тәрбиәләй алырмы икән? Сөнки хатта ауылдарҙа туған телдә һөйләшеүсе балалар кәмей бара, ә тел менән бергә традициялар, халыҡ педагогикаһы ла онотола.

Әйе, йәш быуынға дөрөҫ тәрбиә биреү мәсьәләһе бөгөн күптәрҙе борсоған проблема. "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге лә был хәлгә битараф түгел. 2020-2021 йылда аҙыусы, педагог-ветеран, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева тәҡдим иткән "Урал батыр мәктәбе" проектын ғәмәлгә ашыра башланыҡ. Ошо 4 йыл ваҡыт эсендә проекттың концепцияһы, программаһы эшләнде, ул Башҡортостан Республикаһы Башлыҡының грантына лайыҡ булды. Мәрйәм Бураҡаева тарафынан эшләнгән "Халҡым, һеҙгә шуны әйтәм", "Кеше булһын затығыҙ..." китаптары донъя күрҙе, иң мөһиме - республиканың ҡайһы бер мәктәптәре "Урал батыр мәктәбе" концепцияһына нигеҙләнеп, уҡытыу-тәрбиә эшенә яңы йүнәлеш бирҙе. 90-сы йылдарҙа онотолоуға дусар ителгән рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр яңынан тергеҙелә башланы. Беҙҙең менән тығыҙ бәйләнештә эшләгән Баймаҡ, Ғафури, Дүртөйлө, Ейәнсура, Йылайыр, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүеҙ райондары, Салауат, Күмертау ҡалаларының мәғариф учреждениеларына бик рәхмәтлебеҙ. Беҙ бергәләп эҙләнеү юлындабыҙ һәм халҡыбыҙҙың мәшһүр эпосын тәрбиә эшендә тулыраҡ файҙаланыу мөмкинлектәрен табырға тырышабыҙ, "Урал батыр мәктәбе" концепцияһы менән ата-әсәләрҙе яҡыныраҡ таныштырыу, улар араһында аңлатыу эштәре алып барыуҙы ла үҙебеҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе һанайбыҙ.

Беҙҙең "Урал батыр" эпосына, халыҡ педагогикаһына мөрәжәғәт итеүебеҙҙең төп сәбәбе - юғалған, юғалып барған рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе яңынан тергеҙеү, халҡыбыҙҙың, илебеҙҙең яҡты киләсәген билдәләргә һәләтле балаларҙы, йәштәрҙе тәрбиәләү. Ни өсөн "Урал батыр мәктәбе" һәм "Урал батыр" эпосы тигән һорау тыуыуы мөмкин. Беренсенән, халыҡтың ауыҙ-тел ижадының тәрбиәүи потенциалы бик юғары. Уның бөртөкләп йыйылыуының да сәбәбе шул: халыҡ аҡылы, тәжрибәһе һалынған уларға. Ғалимдар, уйлы, фекерле педагогтар быны яҡшы аңлай, шуның өсөн дә бөгөн Саха (Якутстан), Төньяҡ Осетия-Алания, Коми республикалары мәктәптәрендә урындағы халыҡтың эпостары дәрес булараҡ уҡытыла икән, быға аптырарға ярамай. Икенсенән, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгө мәғариф системаһында тәрбиә өлкәһендә таянып эшләрлек тәҙөк, системалы концепция юҡ. Ә "Урал батыр" эпосында халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе тулыһынса сағылыш таба. Тәүге бүлектән үк йәшәйеш ҡанундары аңлатыла, атай-әсәй һүҙен тыңлау, туғанлыҡтың ҡәҙерен белеү, атай-әсәйгә, илеңә, халҡыңа таяныс булыу, хәл иткес мәлдәрҙә ир-егет булып дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәнеү кеүек бик мөһим мәлдәр яҡтыртыла. Өсөнсөнән, Урал батыр бар ғүмерен илгә, халыҡҡа хеҙмәт итеүгә бағышлаған өлгөлө герой. Ә балаларҙы күренекле кешеләр, батырҙар өлгөһөндә тәрбиәләү - педагогикала киң таралған алым.

Юғарыла билдәләнгәнсә, балаларҙы төрлө ойошмаларға йәлеп итеп тәрбиә биреүҙең һөҙөмтәлерәк булыуын иҫәпкә алып, "Урал батыр мәктәбе" проекты концепцияһына ярашлы тәрбиә биреү үҙәктәре ойоштороу ҙа ҡарала. Мәҫәлән, Йылайыр районының Шәйехзада Бабич исемендәге Башҡорт гимназияһында махсус значоктар эшләтеп, балаларҙы Урал батыр мәктәбенә алыу ойошторолған. Ғафури районының Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназияһында "Әйҙәгеҙ әле, ҡыҙҙар" тигән конкурс түгел, ә "Һомай" конкурсы ойоштороло.

"Урал батыр мәктәбе" проектының концепцияһы буйынса әлегә ун йүнәлеш билдәләнгән. Ул йүнәлештәрҙе арттырырға ла мөмкин. Улар нигеҙендә экологик тәрбиә, миһырбанлылыҡ, кешелеклелек, эскелеккә, наркоманияға ҡаршы көрәш, төплө белем алырға ынтылыш, илһөйәрлек тәрбиәләү, яҡшылыҡ, изгелек, туғанлыҡ тойғоларын үҫтереү буйынса бурыстар ҡуйыла.

Әлбиттә, мәғариф учреждениеларында был йүнәлештәр буйынса саралар ойоштороло, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул саралар сара булараҡ ҡына үтә лә онотола, сөнки уларҙың кәрәклеген, мөһимлеген нигеҙләгән идея юҡ. Әгәр ҙә "Урал батыр мәктәбе" проектында күрһәтелгән йүнәлештәрҙе идея дәрәжәһенә күтәреп, девиз итеп алып, сараларҙы ошо идеяға бәйләп ойошторғанда, уларҙың һөҙөмтәлелеге бермә-бер күтәрелер ине. Мәҫәлән, "Ерҙе асыр асҡысһыҙ, күккә менер баҫҡысһыҙ" йүнәлешен билдәләгән һүҙҙәрҙе девиз итеп алып, төплө белем алыуға ынтылыш тәрбиәләүгә бағышланған саралар - билдәле ғалимдар, врачтар, уҡытыусылар һәм башҡа профессия кешеләре менән осрашыуҙар, фәнни асыштарға бәйле саралар, уҡыусыларҙың эҙләнеү эштәрен барлаған конференциялар ойоштороу бик отошло булыр ине.

Юғарыла билдәләнгәнсә, проектты ғәмәлгә ашыра башлауға 4 йыл үтеп китте. Күптәребеҙ эпосҡа әкиәт тип ҡарарға күнеккән, әммә унда кинәйә менән бирелгән юлдар бик күп. Уларҙың күптәрен асыҡларға Мәрйәм Бураҡаеваның юғарыла аталған китаптары ярҙам итә. Унан тыш, беҙ Ғафури районы Красноусол ауылының Нияз Мәжитов исемендәге башҡорт гимназияһында, Мәләүеҙ районының Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы башҡорт гимназия-интернатында, Ҡырмыҫҡалы районында "Урал батыр мәктәбе" буйынса семинарҙар ойоштορҙоҡ. Ике йыл рәттән Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылының Мәрйәм Бураҡаева исемендәге Башҡорт гимназия-интернатында "Бураҡаева уҡыуҙары" исеме аҫтында фәнни-ғәмәли конференция ҙур уңыш менән үтте. Был уҡыу учреждениелары дәрестәрҙә, кластан тыш сараларҙа "Урал батыр мәктәбе" проектын ҡулланып эшләүҙең өҫтөнлөклө яҡтарын күрһәтте, тәжрибәләре менән уртаҡлашты. 2024 йылдың көҙөндә был проектҡа арналған семинар Йылайыр районында үтәсәк.

Әлбиттә, "Урал батыр мәктәбе" проекты буйынса эшләгән мәктәптәр һаны әлегә һанаулы ғына булып ҡала, концепцияны халыҡ араһында таратыу эше һүлпән бара. Уны тормошҡа ашырыуға булышлыҡ иткән программа эшләү кәрәк. Шул уҡ ваҡытта бер нәмә асыҡ: мәғариф учреждениеларында, ғаиләлә тәрбиә эшенә ныҡ иғтибар бүлергә, һуңғы 30 йыл эсендә аңыбыҙға һеңдерелгән зарарлы идеяларҙан, аҡса, матди байлыҡ кеүек ялған ҡиммәттәрҙән ҡотолорға кәрәк. Төп маҡсаты күберәк аҡса эшләп байыу булған кешеләрҙең ниндәй ҙур еңәйәттәргә һәләтле икәнен беҙ күрҙек, ундай кешеләргә экология ла, халыҡ традициялары ла, уның тарихы, мәҙәниәте лә кәрәкмәй. Улар халыҡ, ил яҙмышына ла битараф. Бәхеткә ҡаршы, әлегә ундай бәндәләр күп түгел, әгәр тәрбиәгә иғтибарҙы тейешле кимәлдә йүнәлтмәһәк, киләсәктә уларҙың бик күп булыуы мөмкин. Үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта сапмайыҡ, хөрмәтле милләттәштәр!

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА.**

✓ *Өфө-II ҡаласығы, урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы - яҡшы һаҡланған берҙән-бер цитадель булараҡ, Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли ҡаҙанышы итеп ҡабул ителергә тейеш.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Алтынсы бүлек. Башҡорт - урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы.



Быңдай оҡшашлыҡтың осраҡлы булыуы мөмкин түгел. Килтерелгән миҫалдар башҡорттарҙың ҡасандыр Төньяҡ Иранда һәм Урта Азияла көн итеп, һуңынан хәрби-сәйәси ваҡиғалар арҡаһында ул тарафтарҙан күсеп китергә мәжбүр булыуына дәлилдер. Ошолайыраҡ фекер итеү Ә.-З. Вәлидиҙең Көньяҡ Уралда "башҡорт" этнонимы хасил булыуын бында үҙҙәрен "башҡорт" тип атаған ҡәүемдәрҙең әле аталған территориянан килеүе менән бәйләп аңлатыуына ҡаршы килмәй. Шул уҡ ваҡытта беҙ күсеп килгән башҡорттар һәм Ҡытай авторҙарының "ба-шу-ки-ли" тип нарыҡлаған ҡәбиләләре араһында туранан-тура бәйләнеш булыуын инҡар итә алмайбыҙ: һуңғылары ана шул күсеп килгән башҡорттарҙы "ба-шу-ки-ли" тип атауы бик мөмкин. Ошо рәүешле фекер йөрөткәндә Көньяҡ Уралда VII быуатта уҡ башҡорт исемле халыҡ йәшәүен таныу фарыз. Ситтән килгән башҡорттарҙың, урындағы халыҡ менән әүҙем бәйләнешкә инеп, Башҡорт атамалы баш ҡалаһы булған дәүләти берләшмәне хасил итеүен күҙалларға була. Ошо ҡәбиләләр берләшмәһенең хәрби-иҡтисади ҡеүәте көсәйә барыуы, формалашып килеүсе башҡорт халҡы йоғонтоһонда, төбәк ҡәүемдәре төркөмдәренең этномәҙәни берлеген хасил итеп, "башҡорт халҡы", "Башҡорт иле" төшөнсәләренең тирә-яҡҡа киң таралыуына алып килә. Әйткәндәй, IX-XII быуаттарҙың яҙма сығанаҡтарында ошо ике төшөнсә, күптән ныҡынған ҡараш сағылышы булараҡ, барса Көньяҡ Уралға ҡарата берҙәй ҡулланыла. Тимәк, уларҙың башланғыс этаптары күпкә иртәрәк ваҡыттарға ҡарай. Әлбиттә, ошо хеҙмәттең авторҙары үрҙә бәйән ителгәндәрҙе тик эш фаразы итеп ҡарай, был тәнҡитле анализды һәм киләсәктәге тикшеренеүҙәр материалдары нигеҙендә раҫлауҙы талап итә.

Авторҙар урта быуаттарҙа "башҡорттар" һәм "башҡорт халҡы" төшөнсәләре формалашыуын ошо рәүешле күрә. Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең ижтимағи иҡтисади һәм мәҙәни-сәйәси үҫеше, этник берләшеү сиктәрендә, яңы сифати кимәлдәге консолидация һөҙөмтәһе булараҡ, "Башҡорт иле" төшөнсәһен IX-X быуаттарҙа барса төбәктәр өсөн ғәмәли фактҡа әйләндерә. Ошо замандағы ваҡиғаларҙы теркәп ҡалдырған Сәләм Тәрджемәндең, Әхмәт ибн Фаҙландың, башҡа билдәле авторҙарҙың яҙмалары Көньяҡ Уралда барған тарихи процестарҙы яҡшы сағылдыра.

Өфө-II ҡаласығында 2006-2007 йылдарҙа уҙғарылған ҡаҙыу эштәренә туҡталып китәйек. Ҡаҙыу эштәре башланыу менән үк, Өфө-II ҡаласығының мәҙәни ҡатламдары стратиграфияһы һәм табылдыҡтар составы, бик оҙайлы ваҡыт арауығында йәшәүенә бәйле, уның ҡатмарлы, комплекслы ҡомартҡы булыуы асыҡланды. Беҙгә, ошо ҡаҙыу эштәрен алып барыусыларға, алдараҡ бәйән итлгән төрлө составлы төҙөү материалдарының сығышы һәм тәғәйенләнеше яңыса һәм аңлайышһыҙ булып тойолдо. Ошо мәсьәләләргә асыҡлыҡ индереү маҡсатында Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институтына һәм Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының Тарих институтына ҡатмарлы стратиграфиялы урта быуат ҡалаларын тикшереүҙә тәжрибә туплаған белгестәрҙе Өфө-II ҡаласығын өйрәнеүгә йәлеп итеү үтенесе менән мөрәжәғәт итте. Ошо үтенескә яуап итеп, 2007 йылдың август айында Өфөгә Ҡаҙандан ТР ФА-ның ағза-корреспонденты Ш. Хузин, Мәскәүҙән тарих фәндәре докторҙары И.Л. Кызласов, Ш. Н. Әмиров һәм тарих фәндәре кандидаты. И.А. Сапрыкина килде. Улар, ҡаласыҡтағы ҡаҙыу эштәре барышы, уның стратиграфияһы һәм табылдыҡтар составы менән танышҡас, үҙҙәренең фекерен Эксперт советы резолюцияһы рәүешендә БР Хөкүмәтенә һәм БР Фәндәр академияһына тапшырҙы. Һуңынан ошо резолюция Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры Н.А. Макаровтың БР Фәндәр академияһына һәм БР Хөкүмәтенең Премьер-министры Р.И. Байдәүләтовҡа ебәргән хатында сағылыш тапты.

Ошо документтар Өфө-II ҡаласығының торошо һәм фәнни әһәмиәтен раҫлаусы тәүге объектив рәсми баһаға тиң булды. Был документтар ентекле комментарийҙар менән баҫып сығарылды, шуға күрә беҙ бында Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры, РФА-ның ағза-корреспонденты Н.А. Макаровтың БР Хөкүмәте Премьер-министры Р.И. Байдәүләтовҡа ебәргән хатынан цитата килтереү менән сикләнәбеҙ. Ул, мәҙәни ҡатламдарҙың яҡшы һаҡланыуын билдәләп, ҡомартҡының хронологик этаптарын аныҡ билдәләй алыу мөмкинлегенә иғтибар итә, ҡаласыҡтың иртә этабында алдан уйланылған проект буйынса төҙөлгән оборона стенаһын үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп өлгөһө, тип фаразлай (ғалимдың хатынан өҙөктө төп нөсхәһендә биреү урынлыраҡ булыр. - **Ред. иҫк.**):

*"Найденные на территории городища находки - изделия из драгоценного металла (ювелирные украшения, детали одежды), изделия из полудрагоценных камней, уникальные находки монет ранневизантийского и золотоордынского времени, а также выявление остатков ювелирной мастерской, специализировавшейся на обработке золота, позволяют интерпретировать это городище как наиболее раннее поселение городского типа на данной территории, время существования которого относится к IV-XV/XVI вв. н. э. Городище Уфа-Н, по результатам экспертной оценки, является крупным, веками существовавшим административным, торговым, ремесленным центром, одним из узловых пунктов истории Урало-Поволжского региона. Научное значение памятника выдвигает его в разряд наиболее ценных исторических источников дописьменной истории Башкортостана и Южного Урала. Вместе с тем, памятник относится к археологическим объектам высшей категории сложности, что исключает возможность быстрого проведения на нем археологических раскопок.*

*По Указу Президиума Верховного Совета республики Башкортостан № 6-2/251 в от 12.05.1992 г., городище Уфа-II является памятником регионального значения и находится под охраной государства. Согласно Федеральному закону "Об объектах культурного наследия (памятников истории и культуры) народов Российской Федерации" (ФЗ-73 от 2002 г. и последующих его редакций от 2003, 2004, 2005, 2006, 2007 гг.), государственным приоритетом является сохранение памятников истории и культуры.*

*Институт археологии РАН считает возможным рекомендовать Правительству Республики Башкортостан рассмотреть возможности для:*

*1. Выведения территории памятника археологии - городища IV-XVI вв. Уфа-II из зоны проведения любых строительных и хозяйственных работ (ст. 36, 37 ФЗ-73 от 25.06.2002 г.);*

*2. Разработки архитектурного опорного проектного плана, схемы планировочной организации земельного участка (ФЗ-143 от 27.07.2006 г., ст. 51, п. 7, З-б) для использования территории городища Уфа-II как объекта экспонирования в туристических целях с элементами музеефикации;*

*3. Разработки проекта зон охраны объекта культурного наследия, установления границ территории объекта культурного наследия как объекта градостроительной деятельности особого регулирования в целях обеспечения сохранности городища (ст. 33, пп. 2-7, 11 ФЗ-118 от 26.06.2007г.). Наличие в центральной части современного города подобного памятника, отличающегося хорошей сохранностью, выраженностью в рельефе, встроенностью его в сложившуюся систему городской планировки, выделяет современную Уфу в разряд особых исторических городов России, имеющих все предпосылки для использования данного объекта исторического наследия, для развития любого вида туризма и культуры.*

*Директор ИА РАН чл.-кор. РАН д. и. н. Н. А. Макаров"*

Өфө-II ҡаласығы, урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы - яҡшы һаҡланған берҙән-бер цитадель булараҡ, Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли ҡаҙанышы итеп ҡабул ителергә һәм, уның ошо статусына ярашлы, өйрәнелергә һәм һаҡланырға тейеш.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Аҙағы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

Шулай итеп, Башҡортостандың хәрби данына тоғро ҡалып, дивизиябыҙҙың барса полктары ла Ҡыҙыл Байраҡлы тигән маҡтаулы исем менән атала башлай. Ә 62- се гв. Ҡыҙыл Байраҡлы атлы полкы Одер йылғаһы аша сыҡҡанда һәм уның ҡаршы ярындағы плацдармда күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн III дәрәжә Кутузов ордены менән бүләкләнә. Юғары Баш командующий И.В. Сталиндың 1945 йылдың 19 ғинуарындағы бойороғона ярашлы, 7-се гв. корпусы частарының барса шәхси составына рәхмәт белдерелә. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 24 мартындағы Указы менән дивизиябыҙҙың ошо офицерҙарына Советтар Союзы Геройы исеме бирелә: 62-се гв. атлы полкының 4-се эскадроны командиры, гв. капитаны Платонов Георгий Федоровичҡа (Һарытау өлкәһенең Хвалынск ҡалаһынан); 62-се гв. атлы полкының 1-се эскадроны командиры, гв. лейтенанты Михайлюк Емельян Иосифовичҡа (Украинаның Хмельницкий ҡалаһынан); СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 6 апрелендәге Указы менән Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булалар: 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадронының взвод командиры ярҙамсыһы, гв. өлк. лейтенанты Николаенко Иван Дементьевич (Украинаның Киев өлкәһе Фастов районынан); 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадронының взвод командиры, гв. старшинаһы Свеженцев Илья Федорович (Курск өлкәһенең Совет районынан); 60-сы гв. атлы полкының 4-се эскадронының взвод командиры ярҙамсыһы, гв. старшинаһы Чернухин Иван Фомич (Курск өлкәһенең Погорелово ауылынан).

Томашув ҡалаһын азат иткәндә батырлыҡ өлгөләре күрһәтикән танкистар, өлкән лейтенанттар, танк ротаһы командиры Петр Иванович Криковлюк, танк взводы командиры Виктор Владимирович Тарабаев Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Дивизияның барса подразделениеларында бик күп яугирҙар ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Дивизия штабы хәрби операцияларҙы бик оҫта ойоштора, штаб начальнигы, подполковник Михаил Андреевич Карпенко элекке штаб начальнигы Ивана Ивановича Голенев кеүек бик тәжрибәле офицер була. Штабтың оператив бүлеге начальнигы, гв. майоры И.И. Сарано гв. подполковнигы Герасим Антонович Черников урынына килә, ул да туҡтауһыҙ барған алыштарҙа һис һынатмай. Дивизияның бәйләнеш начальнигы, гв. майоры Д.Г. Самохвалов штаб һәм барса подразделениелар араһында яҡшы бәйләнеш булдыра. Дивизия командиры, гв. генерал-майоры Г.А. Белов үҙенең алыштырғыһыҙ адъютанты, гв. өлк. лейтенанты Сабир Шакировты маҡтап иҫкә ала, ул командирына дивизия частары менән идара итергә ярҙам итә. Бик ашығыс моменттарҙа С. Шакиров бойороҡтарҙы кодҡа һалмайынса башҡорт телендә асыҡ текст менән ебәрә, сөнки полк штабтарында башҡорт йә иһә татар радистары була, ә немецтар башҡорт телендә яңғыраған бойороҡтарҙы бер нисек тә аңлай алмай. Йәш офицер русса насар белгән Урта Азия республикаларынан килгән яугирҙар өсөн тәржемәсе ролен үтәй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Өс ҡыҙ үҫтек, өсөбөҙ ҙә үҙебеҙгә ышанырға өйрәнгәнбеҙ. Эшләп ҡарайбыҙ ҙа, хатта килеп сыҡмаған осраҡта ла төшөнкөлөккә бирелмәйбеҙ, яңылышыуҙың бер ниндәй ҡурҡынысы юҡ.*



**Бөгөнгө геройыбыҙҙың йәшендә кемдер карьера тураһында хыяллана ғына әле, ә ул иһә үҙенең эшен асып, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Хәҙерге мәғлүмәт бизнесы, "һатып ал - һат" йүнәлеше өҫтөнлөк алған мәлдә ул башҡараҡ эшмәкәрлеккә өҫтөнлөк биргән. Дөрөҫөрәге, еңеллек эҙләмәй, күңеленә ятҡан һәм ҡулы белгән эш уның уңыш нигеҙенә әүерелгән. Әле генә уҡыу йортон тамамлаған ҡыҙ ҙуаллы эшкә тотонорға нисек йөрьәт иткән, бөгөнгө йәштәргә ниндәй кәңәштәре бар - Йылайыр ҡыҙы, Өфөлә "ТЕЛО ПЕЛО" массаж студиялары селтәрҙәренә нигеҙ һалыусы һәм етәксеһе Азалия САФИНА менән ошолар хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

# БАШҠАЛАРҒА ОҠШАРҒА ТЫРЫШМА,

## ә үҙең булып йәшә донъяла



**Азалия, һеҙ - йәш эшҡыуар, башта уҡыусыларҙы үҙегеҙ менән таныштырып, эшегеҙ тураһында һөйләһәгеҙ ине?**

- Сығышым буйынса мин Йылайыр районынан, Башҡорт дәүләт медицина университетын 2021 йылда тамамланым. Әле миңә 26 йәш һәм 2019 йылдан массаж салоны асып, халыҡҡа ошо йүнәлештә хеҙмәт күрһәтәбеҙ. Аныҡырағы, ул франчайзинг селтәре, үҙебеҙҙең салоныбыҙ бар һәм әлеге ваҡытта 3 салонды партнерҙарыбыҙ алып бара. Франчайзинг - сит илдә киң таралған эшҡыуарлыҡ төрө, беҙҙә яңы ғына тарала башланы. Йәғни, идея, бизнес-план, тәжрибә - беҙҙеке, ә теләгән кеше ошо әҙер "ҡап"ты билдәле хаҡҡа һатып алып, эш башлай.

Күптәрҙең быңдай эшкә тотонорға теләге бар ҙа, әммә эшҡыуарлыҡҡа тотонғас та, башта барыһы ла килеп сыҡмауы ихтимал. Мәҫәлән, беренсе йылдары беҙ бер ниндәй килем алмай эшләнек, һәм хатта финанс юғалтыуҙар кисерә инек. Ә был осраҡта кеше тапалған юлдан китә. Сөнки эшҡыуарлыҡҡа тотонорға теләгән һәр кем тәү сиратта юғалтыуҙарҙан, яңылышыуҙарҙан ҡурҡа. Һәр кемдең ғаиләһе бар, аҡса юғалтып, уларҙы йәшәү сығанағынан мәхрүм итеп ҡуйырмын тип тә уйлай, үҙенең һәләттәренә ышанмаусылар ҙа бихисап, нисек кеше ялларға, уларҙы нисек эшләтергә лә белмәй.

**Тимәк, һеҙ университетты тамамлағанда уҡ салон хужабикәһе булғанһығыҙ. Өфө һынлы Өфөлә салон асыу мөмкинлеге бар кешегә лә бирелмәй, быңдай ҡыйыулыҡ, эшлеклелек ҡайҙан килә? Үҙегеҙ үҫкән ғаиләнәнме, әллә ниндәйҙер Уңыш ғәли йәнәптәренә юлыҡтығыҙмы?**

- Башҡорт дәүләт медицина университетына уҡырға ингәс, күптәр беренсе курста уҡ өҫтәмә матди килем табыу йәһәтенән дә, аҙаҡтан табип булып эшләй башлағас кәрәгер тигән уйҙан да массажист һөнәрен үҙләштерә. Атайым беҙ бәләкәй саҡта йоҡлар алдынан көн һайын массаж эшләй торғайны. Мускулдарҙы яҙып, яҡшы итеп тороп яһай, беҙ ҙә уға эйәреп, массаж яраттыҡ. Шуға ла массаж минең күңелемә ятып ҡына торған шөғөл ине. Уҡып алғас, клиенттарым да күбәйҙе, аҙағыраҡ салон асыу идеяһы барлыҡҡа килде. Ошолай яндырайланып, тәүәккәлләп, уйымды тормошҡа ашырырға тотоноуым - холҡом менән атайыма оҡшауымдан киләлер. Ул үҙе математика уҡытыусыһы ине, мәктәп директоры булып эшләне. Ауылда мәктәп директоры булыуҙың ауырлығын унда эшләп ҡарамаған кеше генә белмәйҙер. Ойоштороу һәләте иҫ киткес ине атайымда. Әйтәйек, мәктәптән бушамай, йорттағы ир-ат эштәренә ваҡыты ҡалмаһа, кеше яллай ине. Ауылда кеше яллау ҙа ят күренеш тә инде.

Үҙемдең дә бала саҡтан эшҡыуарлыҡ сифаттары булған ул. Әсәйем һөйләүенсә, ҡурсаҡтарға күлдәк тегәм дә, һеңлеләремә аҡсаға һатам икән. Беҙҙең халыҡ аҡса менән бәйле эштәрҙән бигерәк тә ҡурҡа. Кемдер ҡулы менән матур әйберҙәр яһай ҙа, уларҙы һатырға ояла. Хаҡ ҡуя белмәй, йә: "Ярай, һиңә осһоҙға бирәм", - ти, йә: "Һин минең туғаным, дуҫым һ.б., һиңә бушҡа", - тей. Башҡарған эш өсөн хаҡ алыуҙың бер ояты ла юҡ. Көсөң, энергияң түгелгән эшеңдең баһаһын белергә тейешһең, тигән фекерҙәмен. Үкенескә, атайым мин 9-сы класта уҡығанда вафат булды, ул минең уңыштарымды күреп өлгөрмәне. Ә әсәйем минең ошолай ҡыйыу булыуыма күнегеп бөткәнме икән, хатта аптырамаңы ла шикелле. Ғаиләлә баш баламын, ул миңә тулыһынса ышана һәм юғалып ҡалмаҫымды белә. Ул саҡта кейәүгә сыҡмағайным әле, егетем менән дуҫлашып ҡына йөрөй инек. Гел эргәмдә булып, барлыҡ эштәрҙә ярҙамын тойоп, ныҡлы терәк икәненә инанғайным ғаилә ҡорғанда.

**Һәр атай менән әсәй балаһына яҡшылыҡ теләй, уны уңышлы, тормошта юғалып ҡалмаҫлыҡ итеп тәрбиәләргә тырыша, әммә бик һирәктәр быға өлгәшә. Һеҙҙең ғаиләлә нимәгә күберәк баҫым яһалды?**

- Һәр нәмәлә ирек биргәндәрҙер. Бер ҡасан да улай эшләмә, тип тыйғандары булманы. Ярай, теләйһегеҙ икән, үҙегеҙ ҡарағыҙ, тинеләр, беҙ "Кәрәк" тигәнгә үҙҙәре йүгереп, ярҙамлашып йөрөмәнеләр. Өс ҡыҙ үҫтек, өсөбөҙ ҙә үҙебеҙгә ышанырға өйрәнгәнбеҙ. Эшләп ҡарайбыҙ ҙа, хатта килеп сыҡмаған осраҡта ла төшөнкөлөккә бирелмәйбеҙ, яңылышыуҙың бер ниндәй ҡурҡынысы юҡ.

Бер туған һеңлем баштан уҡ миңә ярҙамлашып, "үҫеп", үҙенең салонын асыуға өлгәште. Үҙеңдең туғандарың менән бергә эш алып барма, тигән фекер бар халыҡта, йәнәһе, был барыбер аңлашылмаусылыҡҡа килтереп, аралар боҙолоуға алып барасаҡ. Беҙҙең осраҡта, киреһенсә, еңел булды, миңә етешмәгән сифаттар унда бар, холҡобоҙ төрлө, әммә бер-беребеҙҙе тулыландырабыҙ ғына. Ғаиләлә лә атай лидер булып, барыһын да башлап йөрөһә лә, әсәйем уға гел ярҙам иткәнен күреп үҫкәнбеҙ. Ошо өлгөнө беҙгә лә күрһәтә алғандарҙыр. Бер эште икәүләп эшләүе еңелерәк.

Хәҙерге әсәйҙәргә ҡарағыҙ: бала өсөн хәүеф тойғоһо юғары уларҙа, сабый саҡта ҡоламаһын, берәй ерен ауырттырмаһын, тип ҡурҡалар, үҫкәс иһә тағы ла ғәзиз балаһы өсөн бөтөн нәмәне эшләргә әҙерҙәр, бары тик "ҡолап" ҡуймаһын. Шуғалыр ҙа бөгөнгө йәштәрҙең йәше үҫә лә, үҙҙәре өлкәнәймәй, үҙенә яуаплылыҡ алмай, ә ниңә ул уға, барыһын да атай менән әсәй эшләргә әҙер ҙә инде.

Беҙ ҙә хеҙмәткәрҙәр яллап эшләтәбеҙ, араларында тап ошондайҙары ла бар. "Мин үҙемдә башҡа өлкәлә һынап ҡарарға теләйем", "Бында эш шул тиклем ауыр тип уйламағайным", тип китәләр, оҙаҡҡа сыҙамайҙар. Әсәйем менән атайымдың тәрбиәһе шул тиклем тәрән аҡылға нигеҙләнгән, хәҙер үҙебеҙҙең балабыҙ булғас, быны мин тағы ла яҡшыраҡ аңлайым. Атай-әсәй булыу ҙа оло һөнәр ул.

**Массаж - ул үҙен ҡараған, яратҡан кешеләр өсөн тигән фекер бар, клиенттарығыҙ кемдәр?**

- Минең бер ҡәтғи талабым бар - массаж эшләүсенең медицина белеме булырға тейеш. Хеҙмәткәрҙәрҙе лә эшкә тәү сиратта ошонан сығып алабыҙ. Бөгөн массаж салондары шул тиклем күп һәм уларҙың һәр береһенең үҙ талаптары һәм клиенты бар. Маркетинг телендә әйткәндә, беҙгә кешене башта физик ауыртыу алып килә. "Арҡам, билем ауырта", - тип киләләр. Кемдер ваҡыт үткәреү өсөн килә, кемдер, ысынлап та, үҙен яратҡан өсөн йөрөй. Спорт менән шөғөлләнеүселәр, туҡланыуына иғтибарлылар күп, улар ҙа ошоларға өҫтәп массажды ла үҙ итә. Минең кеүек йәш әсәйҙәр ҙә мөрәжәғәт итә.

Клиенттар араһында ир-егеттәр күбәйә, улар ҙа үҙен ҡарай хәҙер. Шуныһы ҡыҙыҡ, ир-егеттәрҙә сәләмәтлегенә комплекслы ҡараш ныҡына. Ҡатын-ҡыҙҙар эшкә егелеп, үҙенә ваҡыт таба алмай йөрөй-йөрөй ҙә, һаулығы ҡаҡшап, сыҙай алмай башлағас ҡына килә массажға. Бер курс ала ла, тағы юғалалар. Ә ир-егет спорт залына йөрөй икән, массажға ла килә, йәғни, һөҙөмтәне төрлө яҡлап нығыта. Табип булараҡ, был яҡшы күренеш, тип иҫәпләйем.

Нутрицолог тигән һөнәр популяр бөгөн, кеше туҡланыуға ла иғтибарлы. Шулай ҙа халҡыбыҙҙа "сама" тигән нәмә бар. Нутрицология өҫтөнлөк итергә ҡуша тип кенә түгел, милли үҙенсәлектәргә лә иғтибар итергә кәрәк туҡланыуҙа. Әйтәйек, итте күп ашау беҙҙең йәшәгән климат менән бәйле, миҙгелдәр алышынып тора, йәйгеһен витаминдар күп, яҙға ҡарай уларҙың запасы бөтә. Тик шул уҡ иттең майында ла витаминдар бар, уның аша организм витаминдарға ҡытлыҡты ҡаплай. Ни тиһәң дә, тәбиғәттә барыһы ла камил.

**Юғары уҡыу йортон тамамлайҙар ҙа, үҙ һөнәре буйынса эшләмәй йәштәр, тип һуҡраналар, быға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Был миңә лә ҡағыла, педиатр булып сыҡһам да, уҡыуҙы тамамлағанда даими килем килтереп торған бер нисә салоным булғас, нимә менән шөғөлләне-

***Кеше йәше менән дә, аңы, аҡылы менән дә "олоғая" барырға тейеш, йылдан-йыл үҙең өсөн генә түгел, башҡалар өсөн дә яуаплылыҡ алырға тура килә. Эшҡыуарлыҡты ҡараһаҡ та, һин үҙең ҡорған ғаиләң өҫтөнә, һиндә эшләгән һәр кемдең ғаиләһе өсөн яуаплыһың, улар һиңә ышанып эшкә килгәндәр. Еңел аҡса табам тип эшҡыуарлыҡҡа килеү - ул хата. Был теләк аҡланмаясаҡ. "Эй, уҡымайым да, эшҡыуар булам, аҡсам күп була", тип уйлайҙар. Статистиканы алып ҡарағанда ла, үҙ эшен асыусыларҙың 90 проценты тәүге йылда уҡ эшен яба, был ана шул еңеллек эҙләп килеүселәр инде. Ҡалған 10 проценты аҙнаның 7 көнөндә тәүлектең 24 сәғәтендә эшләй, ял да юҡ.***

ремде белә инем. Һайлау мөмкинлеге һәр ваҡыт бар, әгәр ҙә эш ҡәнәғәтлек килтермәй икән, үҙеңде ыҙалатырға кәрәкмәй.

Шул уҡ ваҡытта, хәҙерге йәштәрҙең араһында үҙеңде, үҙеңә оҡшаған эште тапҡансы эҙләргә кәрәк, тигәнерәк фекер йөрөтөүселәр бар. Шуға ла был ерҙә эшләп ҡарай, бер туҡтауһыҙ икенсе һөнәрҙәргә үҙҙәрен һынай. Былай ярҙан ярға бәргеләнеп йөрөүҙе яуаплылыҡ алырға теләмәү тип тә күрәм. Өлкәндәрсә ҡараш түгел был, туҡтарға, үҙеңде аңларға кәрәктер, бәлки? Уңыш ул тырыштарҙы, хатта, һәйбәт мәғәнәһендә, еңмешлекте ярата.

Кеше йәше менән дә, аңы, аҡылы менән дә "олоғая" барырға тейеш, йылдан-йыл үҙең өсөн генә түгел, башҡалар өсөн дә яуаплылыҡ алырға тура килә. Эшҡыуарлыҡты ҡараһаҡ та, һин үҙең ҡорған ғаиләң өҫтөнә, һиндә эшләгән һәр кемдең ғаиләһе өсөн яуаплыһың, улар һинә ышанып эшкә килгәндәр. Еңел аҡса табам тип эшҡыуарлыҡҡа килеү - ул хата. Был теләк аҡланмаясаҡ. "Эй, уҡымайым да, эшҡыуар булам, аҡсам күп була", тип уйлайҙар. Статистиканы алып ҡарағанда ла, үҙ эшен асыусыларҙың 90 проценты тәүге йылда уҡ эшен яба, был ана шул еңеллек эҙләп килеүселәр инде. Ҡалған 10 проценты аҙнаның 7 көнөндә тәүлектең 24 сәғәтендә эшләй, ял да юҡ. Мин декретҡа сыҡҡас ҡына ял итеп ҡалдым. Ирем беренсе өс ай бөтөнләй ялһыҙ эшләне, сөнки үҙенең бурыстарынан тыш, мин алып барған эштәр өсөн яуап бирергә кәрәк ине. Әйткәндәй, ул нефть өлкәһендә уңышлы эшләп йөрөгән еренән ғаилә бизнесына күсте. Күп эштәрҙе әле ул алып бара. Мин күбеһенсә стратегик идаралa.

Эш тип ғаиләне онотмайбыҙ. Йылайырға - әсәйгә, Әлшәйгә - ҡәйнәмә, Хәйбуллаға өләсәйемә йыш ҡайтып торабыҙ.

**Уңышҡа өлгәшкән, киләсәгеҙ яҡшы күҙаллаған кеше булараҡ, нимәләр тураһында хыялланаһығыҙ? Әллә ниндәйҙер үргә еткәс, хыялдарға урын ҡалмаймы? Һеҙҙең өсөн киләһе үр нимә?**

- Эш башлағанда, әлбиттә, хыялдарға тәкәбберлек, минмминлек хистәре хас була, әйтәйек, мин иң яҡшы салондар хужаһы булам, тип уйлайһың. Аҙаҡтан был хыялдар яйлап "ергә төшә". Бизнесың бара икән, һин уның иткән хеҙмәт кешеләргә оҡшай икән, әлбиттә, артабан да үҫергә кәрәк. Әлегә Өфөлә салондар селтәрен үҫтерәбеҙ, бәлки, киләсәктә баш ҡалаға яҡынырак ҡалаларҙа ла асырбыҙ. Мин массаж аша медицинаға булған һөйөүемде тормошҡа ашырам - ошо миңә ҡәнәғәтлек бирә, ә салондар иҫәбе түгел. Бер ҡасан да клиенттарға: "Массажға кил, бөтөн проблемаларың хәл ителер",- тип вәғәҙә бирмәйбеҙ. "Быны ошонда ярҙам итәсәкбеҙ, бында - юҡ" , - тип, аныҡын әйтәбеҙ. Мәҫәлән: "Ябыҡмаясаҡһығыҙ, әммә тиренең рельефы яҡшырасаҡ, тире аҫтына йыйылған шештәр ҡайтасаҡ", - тибеҙ. Шуға ла миңә медицина белеме булған хеҙмәткәрҙәр менән эшләүе уңайлы.

Массажистар күп ул, ә беҙ махсус белеме булғандарҙы эҙләйбеҙ. Тәжрибәле массажист кешенең тәненә ҡарап, уның нимә менән шөғөлләнеүен, холҡон да самалай ала. Уҡытыусы, кассирҙарҙың аяҡтарында шеш булыуы ихтимал. Гел көсөргәнештә йөрөгәндәрҙең муйынына зонаһы ҡатыулап китә, оялсандарҙың, үҙен күрһәтергә ынтылып тормағандырҙың умыртҡа бағанаһы ла көмөрәйә. Киреһенсә, шытып сығып барыусыларҙың мускулдары тонуста, уларҙы массаж аша "ергә төшөрөп", ошо көсөргәнештән азат итергә кәрәк. Шуға ла массаж - ул оло һөнәр, һәр клиенттың үҙенең тарихы бар һәм уға айырым ҡараш мөһим.

Эштә хәҙер ярҙамсылар, идарасылар бар. Командама ышанам, шуңһыҙ эш алға бармаҫ ине. Үҙемә иһә маркетинг һәйбәт бирелә, ошо йәһәттән алдан күреү һәләтем бар, миңә шул сферала эшләү оҡшай.

**Хәҙерге йәштәргә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Йәштәрҙең башҡорт булыуҙарын әйтеп йөрөүе, үҙҙәрен ошо милләт вәкиле итеп таныуҙары оҡшай. Башҡортса һөйләшәләр. Шул уҡ мәлдә бөгөн кеше социаль селтәрҙәр аша үҙен, үҙенең тормошон матур итеп күрһәтергә, ниндәйҙер билдәле кешеләр менән аралашыуын ниндәйҙер бер уңыш билдәһе итеп күрһәтергә тырыша. Уларға оҡшарға тырышыусылар, тимәк, үҙенең ысынбарлыҡ тормошо менән ҡәнәғәт булмаусылар күбәйә. Экран артында нимә булғанын белмәйһегеҙ бит, һуҡырҙарса кешегә эйәрмәгеҙ, тиер инем. Үҙегеҙ булып ҡалығыҙ, яңылышыуҙарҙан ҡурҡмағыҙ, бөгөн килеп сыҡмай икән, иртәгә хыялдар мотлаҡ тормошҡа ашасаҡ.

Иң мөһиме, һиңә нимә кәрәк икәненә төшөнөргә. Бәлки, һеҙгә бизнес кәрәкмәйҙер, ә күңел ятҡан эш башҡараҡтыр. Бәлки, һеҙгә сит илгә ял итергә барырға кәрәкмәйҙер, ҡала эргәһендәге күлгә сығып, ғаилә менән ял итеп ҡайтыуҙан ныҡыраҡ ҡәнәғәтлек алаһығыҙҙыр. Күңелегеҙҙе тыңлағыҙ һәм үҙегеҙ булып ҡалығыҙ. Белем алыуға килгәндә, хәҙер мөмкинлектәр күп, үҫегеҙ, камиллашығыҙ. Барыһы ла кешенең үҙенән тора.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Азалияның үҙ эшен мөкиббән китеп, шул уҡ ваҡытта бар нәмәне лә шул тиклем еңел генә итеп һөйләүенә, шаҡсән үҙем, хайран булдым. Өфөлә салон асыу - ул йәше һәм тәжрибәһе булған кеше өсөн дә оло эш, ә ул студент сағында уҡ уны атҡарып сығара алған һәм быны ғәҙәти нәмә итеп ҡабул итә. Үҙенең баһаһын, үҙенә нимә кәрәклеген һәм мөмкинлектәрен яҡшы белгән өсөн дә шулайҙыр. Бәлки, тап ошо сифаттарҙы тәрбиәләгәндә милләттәштәр араһында үҙен уңышлы кешемен тип иҫәпләүселәр күбәйер ине? Геройыбыҙ әйтмешләй, уңышлы эшҡыуар булмауың да бар, әммә уңышлы кеше булыу һәр кемдең төп бурысы.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

РУХ УСАҒЫ

# БЫЛ ҠОМАРТҠЫЛАРҘА...

## халҡыбыҙҙың йәшәйеш өлгөһө

**Ҡанбабаларыбыҙ ҡалдырған рухи, матди мираҫ саҡтылары һәр беребеҙҙең күңелендә йәшәй. Әммә халҡыбыҙдың ошо изге аманатын, байлығын йыйып, ишәйтеп, киләһе быуынға тапшырыу бурысын һирәктәр генә башҡара. Ейәнсура районының Ҡарғалы ауылында йәшәүсе Таһир Хаммат улы Аҙнабаев шундайҙарҙан.**





Халыҡ рухына, тарих бөйөклөгөнә тоғролоҡ ошо изге эшкә этәргәндер уны. Ата-баба тотонған көнкүреш әйберҙәрен, һауыт-һабаһын, кейгән кейемдәрен, эш-яу ҡоралдарын, боронғо биҙәүестәрҙе, ат егеү кәрәк-яраҡтарын бөртөкләп йыя башлай ир уҙаманы. Ошо экспонаттары менән Салауат районында үткән Салауат йыйынында ҡатнаша. Районыбыҙ тирмәһе республика конкурсында Гран-при яулай. Быны ошо затлы аманат, ҡомартҡыларҙы бүләк итте Таһир Хаммат улы беҙҙең башҡорт гимназия-интернатының этнопедагогика музейына.

Экспонаттарҙы барлайым да, хайран ҡалам: күпме зауыҡлыҡ, теүәллек уларҙа. Урҙаларҙа эленеп торған милли кейем, таҫтамалдар, йөҙләклә урындыҡтағы мендәр, балаҫ, ҡорама юрған, түшәктәр. Иҫ киткес сағыу, һоҡланғыс улар! Халыҡ оҫталары эшләгән ныҡлы, ышаныслы, бәҫле әйберҙәрҙә күпме оҫталыҡ, сабырлыҡ, зиһен сағыла! Балаҫ һуғыу станогы, көбөсәк, етеле шәмдәр, емеш-еләк йыйыр өсөн тырыз, ҡаястар, батман, тәпәндәр, ҡарындыҡ тәҙрә, боронғо төрән, һабандар, еҙ ҡомған, еҙ самауырҙар - һәр береһе тарих һөйләй, башҡорт үткәнен тирә. Ошо баһалап бөткөһөҙ хазина, ҡомартҡылар аша уҡыусыларыбыҙ күңеленә милли рух һалыу, тарихи үҙаң уятырға тырышабыҙ. Әммә...бала күңелендә тарихи үҙаң, рух уятыу бик ҡатмарлы эш. Ҡурай моңо аҫтында йөҙләклә урындыҡ күрһәтеп, һөйләп кенә йәш быуын күңеленә уға бер минут эсендә оло һөйөү тәрбиәләү мөмкин түгел.

Билдәле педагог Иршат Вәлиев: "Этнопедагогика йәш быуынды тәрбиәләүҙең ҡатмарлы системаһына эйә, халыҡ тарихы үҙе үк йәш быуынды тәрбиәләү тураһындағы ижади эҙләнеүҙәр тарихы ул", - тип яҙғайны.Тап өҫтөнә баҫҡан ул! Тарихи ҡомартҡылар менән бала күңеле араһында гармония тыуҙырыу, үткән менән бөгөнгө араһында күпер һалыу еңел түгел.

Әммә мөмкин. Беҙҙең уҡыусыларыбыҙ корея, ҡытай иероглифтарына иҫтәре киткәндә, ниңә әле ата-бабаларыбыҙ тамғаларын иҫкә төшөрмәҫкә? Бар донъя фэншуй тип алйығанда, беҙ өләсәйҙәребеҙ һөйләгән ҡот төшөнсәһен бар тәрәнлеге менән еткерә алабыҙ бит! Ҡанбабаларыбыҙ мираҫ иткән боронғо әйберҙәрҙә күпме аҡыл, күпме философия! Шуларҙы яйлап ҡына заманлаштырыу кәрәк. Нисек, тиерһегеҙ?

Бишекте генә алайыҡ - уны бит музей түрендә эленеп торған экспонат итеп түгел, ә бөгөнгө көндәге ходунок, трансформер коляскалар башланғыс алған затлы ҡомартҡы итеп таныштырырға була. Был бишеккә хәҙер уҡыусылар туғанлыҡ тойғоһон уятыусы, быуындар бәйләнешен тотоусы изге ҡомартҡы итеп ҡарай. Күпме өйҙәрҙә ҡарт олаталары эшләгән бишектә бүлә-бүләсәрҙәр генә түгел, туған-тыумаса, тыуа-яттар тирбәлгән!

Музейыбыҙҙа төрлө эш ҡоралдары һөйләгән шаҡармаға ла уҡыусылар икенсе күҙлек менән ҡарай. Сөнки "яңы башҡорт"тарҙың ике-өс ҡатлы коттедж эргәһендәге баҡсаны талдан үрелгән шаҡарма, ситән менән уратыуын күрһәткән фотолар, фотозоналар ҡараны балалар. Этнопедагогика музейын боронғо әйберҙәр ҡуйылған тарихи урын итеп кенә түгел, ә районға килгән ҡунаҡтар теләп килеүсе туристик маршрут итеп беләләр улар. Районыбыҙ картаһында этнопедагогика музейы билдәләнгәнен ғорурлыҡ менән ҡабул итәләр. Шулай, музей экспонаттары, аралашыу, ҡыҙыҡһындырыу ярҙамында уҡыусыларыбыҙҙың тарихҡа күҙҙәрен асабыҙ, ә күҙе асылған баланың йәйләп күңеле лә асыла. Тарих менән ҡыҙыҡһыныуҙарын ижади, эҙләнеү эштәрендә күрһәтә башланылар. Районда ғына түгел, республика кимәлендә үткәрелгән конкурс, ғилми-ғәмәли конференцияларҙа еңеүҙәре лә бар.

Егеттәребеҙ өсөн өҙәңге, даға, ыңғырсаҡ, ауыҙлыҡ, дуға, айыл кеүек һүҙҙәр ят түгел. Ат егеп, туғара, атҡа йүгән кейҙерә, өҙәңге ҡайышын нисек ҡыҫҡартырға кәрәк икәнен беләләр икән, был бит шәп! Башҡорт аты тураһында сәғәттәр буйына тыңларға әҙер улар. Ә ҡыҙҙарыбыҙҙың боронғо кейем өлгөләрен, биҙәүестәрен ҡарағанда, күҙҙәре янып китеүен күрһәгеҙ икән! Алмиҙеү, сәскап, ҡашмау, сәсүрмәстәрҙе һулыштары ҡабып иҫтәтеүҙәрен күреү - йән рәхәте. Быны шулай: уҡыусыларыбыҙ күңеленә ата-баба кәсебе, көнкүреше, ил-йорт ҡәҙере, тәбиғәт байлығы тураһында ҡоро һүҙ менән генә түгел, ә төрлө алымдар менән аманат юлы һуҙабыҙ.

Оло мәғәнәле бер легенда йәшәй. Гонаһ тулы ер өҫтөнә ҡалҡырға теләмәгән ҡояшты фәрештәләр ҡамсылап сығырға мәжбүр иткәндәр. Ә балаларҙа нисек милли рух, милли үҙаң уятырға? Ниндәй юлдар менән? Өгөт менәнме? Ҡамсыһын күрһәтергәме? Башҡасамы? Юлдары бар... Күңел генә һалырға кәрәк! Иң мөһимен онотмайыҡ: халҡыбыҙҙың үткәнен, тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен, йәшәү рәүешен, бөйөк шәхестәренең ғүмер юлында яҡтылығын киләсәк быуынға еткерә белгәндә генә милләтебеҙ тамыры өҙөлмәйәсәк.

Нурия ҠУНЫСБАЕВА.
Ейәнсура районы.

***✓ Кеше хайуан кеүек ашап ҡына йәшәүгә өйрәнде, ҡулланыусыға әйләнде, эште, хеҙмәтте ташланы, буш йәшәргә, буш һүҙҙәр һөйләргә өйрәнде, был әхлаҡһыҙлыҡ, иманһыҙлыҡ халыҡтың кешелеклеген юғалтыуға килтерҙе.***



# ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ

*Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА*

*(Хикәйә)*

*Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һәм һәләк булған батырҙарға арнайым.*

–"Ни өсөн беҙ башламаныҡ?" тигән һорауға асыҡлыҡ индерәйек. Беҙ башламаныҡ, беҙ бары алдан өлгөрҙөк! Тарихтан белеүегеҙҙә, Бөйөк Ватан һуғышы тоҡанырын совет разведчиктары Сталинды күпме тапҡыр иҫкәрткән. Ул тыңламаған, ышанмаған, көткән. Һөҙөмтәлә нисәмә миллион ғүмер өҙөлгән, 4 йыл буйы дауам иткән ҡанлы һуғыш ҡупҡан! Әгәр хәрби разведканың донесениеларын Президентыбыҙ ҙа инҡар иткән булһа, ошо көндә Рәсәй тигән ил булыр инеме? Әйтеүе ҡыйын! Сөнки Украиналағы революцияны, 2014 йылғы Евромайҙанды иҫләһәгеҙ, аңлағыҙ: был уларҙың беҙгә ҡаршы иғлан иткән һуғыштың башы түгел, был бары меңдән бер өлөштөң сағылышы! Ә Рәсәйгә ҡаршы йәшертен һуғыш Бөйөк Ватан һуғышы йылдарынан уҡ алып барыла! СССР-ҙы тарҡатыу, социализмды еңеү, төрлө милләт халҡын бер-береһенә ҡаршы ҡотортоу, динһеҙлекте, аҙғынлыҡты, түбән хайуани инстинкттарҙы киң массаларға таратыу, балаларҙы тәртипһеҙлеккә өндәү, енси бәйһеҙлекте, бер енесле ғаиләләрҙе пропагандалау - ул халыҡты, бөтөн йәмғиәтте тарҡалыуға алып килде. Кеше хайуан кеүек ашап ҡына йәшәүгә өйрәнде, ҡулланыусыға әйләнде, эште, хеҙмәтте ташланы, буш йәшәргә, буш һүҙҙәр һөйләргә өйрәнде, был әхлаҡһыҙлыҡ, иманһыҙлыҡ халыҡтың кешелеклеген юғалтыуға килтерҙе. Шуның арҡаһында һеҙҙең күңелдәрҙә патриотизмға, илһөйәрлеккә, намыҫҡа, үҙ-үҙеңде ҡорбан итеүгә урын юҡ! Унда рәхәт йәшәү, күңел асыу, тормоштоң бөтөн ләззәтен татыу тигән тойғолар ғына хакимлыҡ итә! Шулай түгелме? - Сайранов бер аҙға туҡтаны. Шып-шым. Һәр һалдат үҙ күңелен байҡай, соҡсона ине шикелле...

- Был - беренсеһе, йәғни мәғлүмәт, рухи пропаганда һөҙөмтәһе. Икенсенән, һуғыш тамамланғас та Совет иленең бандерасылар менән көрәшеүен дауам итеүе бөтәгеҙгә лә билдәле. Был көрәш 1960 йылдар башына тиклем дауам иткән, сөнки Бандераның эйәрсәндәре 100 меңләп кешегә барып еткән. Улар Украинанан ғына түгел, бөтөн Европа илдәренән йыйылған нацистар. Һәм Евромайҙанға сығыу - ул тиҫтәләрсә йылдар буйы аҫтан алып барылған йәшерен сәйәсәттең әҙемтәһе.

АҠШ менән Европаның, йәғни НАТО илдәренең Рәсәйҙе юҡҡа сығарыу планы буйынса Украина беҙгә баҫып инергә һәм билдәле ҡыҫҡа ваҡыт эсендә еңеү яуларға тейеш ине. Бының өсөн тиҫтәләрсә йылдар уларҙың ир-аты Европала, атап әйткәндә, Бөйөк Британияла хәрби әҙерлек алып барҙы. Улар зомби, йәки робот хәленә еткереп автоматлаштырылған наемниктар - кеше үлтереүселәр. "Укроптар" тип атаған хәлдә лә, улар милләте буйынса украиндар ғына түгел, поляктар, немецтар, словактар, чехтар, британиялылар, американдар, хатта ҡара тәнлеләр ҙә бар.

Шуға күрә беҙ Украинаға, йәки украин халҡына ҡаршы ҡоралға тотонғанбыҙ, илдәренә баҫып ингәнбеҙ тип уйлау - ул хата! Был беҙ башлаған һуғыш түгел, был III Бөтә Донъя һуғышын иҫкәртеү өсөн яһалған мәжбүри аҙым! Шуны аңлағыҙ һәм хәҡиҡәтте онотмағыҙ! Беҙ оккупанттар түгел, ә нацистарға һәм неонацистарға ҡаршы ҡорал күтәргән илһөйәрҙәр! Беҙҙең бурыс - НАТО әҙерләгән һәм Рәсәйгә ҡаршы һөсләткән нацистарҙы юҡ итеү!... - Замполит йәнә туҡтаны. Һалдаттарҙың был мәғлүмәтте аңлауын, эшкәртеүен һәм йөрәктәренә һеңдереүен көттө.

- Өсөнсөнән, беҙ тиҫтәләрсә йылдар украин нацистарының геноциды аҫтында йәшәгән Луганск, Донецк һәм башҡа бер нисә өлкәләге рус халҡын ҡоллоҡтан, иҙелеүҙән ҡотҡарырға килдек! Һәр берегеҙҙең йәшәгән ерендә кемдәр бар? Күршегеҙ кем? Рус, башҡорт, ҡаҙаҡ, мордва, удмурт, грузин... Хатта беҙ уларҙың ниндәй милләттән икәнен уйлап та бирмәйбеҙ. Сөнки беҙ туғандаш, илдәш, беҙҙә толерантлыҡ көслө. Сиркәү менән йәнәш мәсет тора һәм был беҙҙе аптыратмай ҙа... Шулай булырға тейеш. Ә уларҙа рус халҡына ҡаршы аяуһыҙ геноцид бара, күрә алмаусанлыҡ, нәфрәт тәрбиәләнә. Русофобия! Урамдарҙа барып, русса һөйләшеп ҡарағыҙ, һеҙгә яуап биреүсе булырмы? Әллә шунда уҡ ҡорал тоҫҡарҙармы? Бына нимәгә килтерә бер халыҡты икенсеһенә ҡаршы ҡуйыу, нәфрәт тыуҙырыу!..

Быңдай политуҡыуҙарҙан һуң күп егеттәрҙең аңы уянды, күҙҙәре асылды. Бына ни өсөн кәрәк булған Махсус хәрби операция! Бына ни өсөн саҡырған уларҙы ил башлығы! Уларҙың ҡарт ҡартаталары, бабалары ҡан ҡойған Украина ерендә оялаған фашистар, нацистар, Бандера ҡалдыҡтарын ер өҫтөнән һепереп түгеү өсөн! Терроrҙы юҡҡа сығарыу өсөн!

Яугирҙарҙың йөрәктәренә кескәй генә осҡон төшкәйне инде. Замполит белә: көндәр үтер, был осҡон яйлап ҡына дөрләп яныр утҡа, ялҡынға әйләнер! Бөтөн донъяны үҙ ҡулында тотор өсөн әле ул илдә, әле тегендә һуғыш утын тоҡандырған АҠШ-тың башһыҙ башлығына, уның эйәрсендәре булған, һәр сөскөргәненә "Йәрхәмбикалла" тип торған Европа илдәренең батшаларына ҡарата нәфрәт уты дөрләр. Үҙеңдең хаҡлығыңа төшөнөү, илең алып барған сәйәсәтте хуплау - һалдаттың иң изге бурысы булған Тыуған ерен һаҡлау, уның именлеге өсөн баш һалыу, ватансылыҡ тойғоһо - бар ҡоралдан да көслөрәк! Шул арҡала ғына Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә өлгәшелгәнде һәр кем аңлай!

Быңдай политучебалар йыш була, һорауҙар ҙа арта. Һалдаттар инде унан-бынан йыйылған кешеләр түгел, улар бер йоҙроҡҡа уҡмашҡан коллектив, бер команда! Бер-береһен күҙ ҡарашынан аңлай, унан нимә талап ителгәнен төшөнә, һәр осраҡта иңен ҡуйырға әҙер. Быңдай һуғышсыларҙы алғы һыҙыҡҡа ебәреүе лә ҡурҡыныс түгел!

Сәйәси әҙерлектән тыш, практик күнекмәләр ҙә үткәрелде. Һәр кем үҙенең ҡоралы менән эш итергә, көтөлмәгән ситуацияла нисек ҡулланырға, нисек һаҡланырға өйрәнде. Яралангандан һуң госпиталдән сығып, уларҙың часына килгән "бывшийҙар" бик күп нәмәгә өйрәтте уларҙы. Теория ғына әҙ шул, үҙ күҙҙәрең менән күреп, үҙе иңеңдә татыу - бөтөнләй икенсе. "Боксер" теләгәндәрҙе ҡул һуғышы алымына ла өйрәтте. "Лев" та өйрәнде, һаҡланғанды Хоҙай һаҡлармын тигән, кәрәге тейһә - яҡшы, теймәһә инде - бигерәк тә яҡшы буласаҡ!

Тәүҙәрәк йоҡлағанда ла автоматтарын ҡосаҡлап йоҡлайҙар ине, һуңғараҡ күнегә төшкәс, ағасҡа, блиндажда булһа, янына һалып, бронежилетты сисеп, тәндәрен ял иттерергә күнектеләр. Касканы ла хәҙер көнө буйы кейеп йөрөмәйҙәр. Беренсе ҡурҡыу үтте, ахырыһы... Уларҙа ауырлығы 8 килограмм тирәһе икенсе класҡа ҡараусы керамик бронежилеттар. Ә алғы һыҙыҡтағы десантсы-штурмовиктар 20 килоға еткән бронеметалдан эшләнгән ҡаты пластинанан торған иң яҡшы һаҡлаусы бронежилет кейәләр. Шулай уҡ кәүҙәнде уратып күберәк запас магазиндар таҡһаң, иҫән ҡалыу мөмкинлегең дә арта. Сөнки пуляның кәүҙәңә түгел, ә магазинға эләгеп, ҡаҡлығыуы бар. Яраланһаң да еңелсә яраланаһың. Пленға эләккән "укроп"тың 30-лаған магазинға уранып йөрөүөнән көлгәйнеләр. Әллә патрондар күберәк булһын тигәнме, әллә йәшәргә теләге көслө булғанмы?..

Тиҙҙән һәр береһенә тиерлек рациялар, тепловизорҙар таратылды. Тылдан да аҙыҡ-түлек, кейем-һалым менән гуманитар йөк йыш килә башланы. Ҡоралды, "Газел"дәрҙе, кухняны һәм башҡа нәмәләрҙе йәшереп ҡуйырлыҡ маскировкалаусы сеткалар -"массетка"лар килеүе айырыуса шатландырҙы яугирҙарҙы. Коптерҙарға уларҙы асыҡлауы ауырға төшәсәк хәҙер.

* * *

Алғы һыҙыҡта "Вагнер" ЧВК-һы, унан һуң беҙҙең десантсылар, өсөнсө һыҙыҡта ғына мобилизация менән килгәндәр бара ине. "Вагнер"ҙар Мәскәү менән килешә алмай, контрактты өҙөп, фронтты ташлап киткәс, хәлдәр, әлбиттә, бөтөнләй икенсе төҫ алды. Десантсы штурмовиктар алғы һыҙыҡҡа күсте, улар артынан мобилизацияныҡылар бара. Ул арала Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә, Башҡортостанда ла, үҙ ирке менән яуға барырға теләүселәрҙән исемле батальондар төҙөлдө. Добровольцтарҙы, бер ай тирәһе әҙерлек үткәндән һуң, вагнерҙар урынына, беренсе һыҙыҡҡа оҙатыу башланды... Штурмлаусылар алға күсһә, мобилизацияныҡылыр ҙа улар артынан алға шыуыша, яңы окоп, траншея ҡаҙа, ваҡытлыса блиндаж төҙөп урынлаша.

- Взвод, к бою! Батарея, к бою!

- Внимание, батарея!

- Цель - 18.05! Установить наводку!

- Миномет готов!

- Наводка готова!

- Осколочно-фугасным! Две мины, беглым огонь!

- Пулемет, к бою!..

Орудие расчетының командиры теүәл командалар бирә. Наводчик төҙләй, заряжающий подносчик ташып торған снарядтарҙы бер-бер артлы минометтың көбәгенә төшөрә. Ул арала:

- Выстрел! - тигән команда яңғырай һәм расчет һалдаттары ауыҙҙарын асып, ҡолаҡтарын баҫып, ергә сүгәләй. Наводящий һул ҡулы менән ҡулсаны бора һәм көслө шартлау яңғырай... Егеттәр йәнә урындарынан һикереп тора ла эшен дауам итә...

- Работаем, ребята, работаем!

Бер-бер артлы минометтар, пулеметтар һәм башҡа ҡорал телгә килә. Зариф та үҙенең һалдаттар араһында "Муха" тип йөрөтөлөүсе РПГ-һын алып, уңайлап ята. Корректировщиктарҙың күрһәтмәһен теүәл үтәй. Прицелдан дошмандың йәшеренгән урынына тоҫҡай. Ә беҙҙекеләр дрон аша үҙҙәре күренмәһә лә, "укроп"тарҙың ҡайҙа йәшенгәнен, йәғни дислокация урынын таба. Һөжүм оҙаҡ дауам итмәй. Бер урындан биш-алты тапҡыр аталар ҙа, тиҙ генә икенсе урынға күсәләр, сөнки шылып өлгөрмәһәң, дошмандың яуабы тиҙ буласаҡ: бер нисә секундтан снарядтар ямғыры ул ерҙе аҡтарып сығара!

* * *

...Алғы һыҙыҡтағы окоп тормошона, пулялар яуыуына ла күнегә икән кеше. Һалдаттар бер нисә көндән ҡаршы яҡтан осоп килгән миналарҙың тауышынан танырға, айырырға өйрәнде. Ҡайһы мина уңғараҡ оса, ҡайһыһы һулғараҡ, ҡайһыһы тап һинең өҫтөңә килә. Шулай уҡ беҙҙең һалдаттар атамы, ҡаршы яҡмы - тауышынан танийҙар. Үҙ өҫтөңә осҡан минаны ишетмәүең менән хәүефле: ҡаршы яҡтан аттылар, атыу тауышы яңғыраны, ә снаряд һыҙғырғаны ишетелмәй, тимәк, ул тап һинең өҫтөңә килә. Шул секундты файҙаланып, йәшенеп өлгөрһәң - тере ҡалаһың! Моментты үткәрҙеңме - бөттөң! "Полька" тип йөрөтөлгән поляктарҙың пулеметы һөжүмгә күсһә лә абай булыуҙы талап итә - ул тауышһыҙ ата. Бер ҡайҙан да пуля һыҙғырмай, ә үҙе һалдаттарҙы сүпләй генә! Беспилотниктарҙы ла айырырға өйрәнделәр: һағыҙаҡ кеүек геүләгәне разведка яһай, ергә һеңеп, йә ағасҡа терәлеп тик кенә торһаң, уның һине күрмәүе бар. Быңдай коптер ҡурҡыныс түгел. Әгәр инде ауыр ғыжылдап, көс менән килә икән, ул инде шартлатҡыс алып килә тигән һүҙ. "ВОГ - 17" менән йыһазландырылған коптерҙарҙы "Подарок с неба" тип йөрөтәләр. Һалдаттар уларҙың килеүен алдараҡ ишетһә, йәһәтерәк ышыҡланырға, алдан атып төшөрөргә, йәки блиндажға ҡасып, ергә һеңергә тырыша. Бигерәк тә төрөктәрҙең самолет формаһындағы "Байрактары", шулай уҡ яугирҙар телендә "Баба-яга" тип йөрөтөлгән ҙур дрондар ҡурҡыныс. Улар снаряд, мина, граната алып килеп ташлай һәм уларҙы юҡ итеүе лә ауыр.

**(Дауамы. Башы 16-18-се һандарҙа).**

АҠҺАҠАЛ ҺҮҘЕ

**Яҙын ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа сәскә атып, юҡ булған умырзая хаҡында күптән түгел уйланып ултырҙым. Сәскәнең атамаһы ҡайҙан килеп сыҡҡанлығы ла ҡыҙыҡһындырҙы. Интернетта бер автор был һүҙҙең "умыр" тигән тәүге өлөшө - "ғүмер", ә икенсе яртыһы "зая" - "бушҡа" тип аңлатма биргән. "Фарсы" һүҙҙәре улар, тигән һығымта ла яһап ҡуйған. Ана шул ике һүҙҙән торғанлығы тураһында үҙем дә тап шундай фекерҙә инем. Әммә уларҙың "фарсы"лығы менән килешә алмайым, сөнки улар - ғәрәби һүҙҙәр. "Ғүмер" һүҙе беҙгә ғәрәптән үҙгәрешһеҙ күскән. "Зая" тигәне - "юғалыу" тип тәржемә ителә (ғәрәпсә "ҙая" һымағыраҡ әйтелә). Ябай итеп әйткәндә, сәскәнең исеме "заяға үтә торған ғүмерле" тигән мәғәнәгә эйә.**

# УМЫРЗАЯ ҒҮМЕРЛЕЛӘР ТУРАҺЫНДА

"Умырзая" йырын да бала саҡтан уҡ яттан белә инем. Уның һүҙҙәренә, бәлки, нығыраҡ та иғтибар иткәнмендер: шул аҙ ғүмерле сәскәне йәлләй торғайным. Яҡташыбыҙ - шағир Әхмәт Фәйзуллин (1903 йылда Өфөлә тыуған, 1958 йылда Ҡаҙан ҡалаһында вафат) яҙған уны. Маҡсатым - был һүҙҙең тамырын асып биреү түгел, әлбиттә. Ана шул сәскәне әҙәм балалары менән сағыштырғым килде. Ҡыҫҡа ғүмерле ошо матур сәскәләргә ҡараһам, ғүмерҙең башында ғына тормош арбаһынан төшөп ҡалған бәғзе бер яҡташтарым күҙ алдыма баҫа...

Умырзая сәскә атҡан мәлде кемдең күргәне юҡ? Оҙон ҡышты үткәреп, яҙ ҡояшына йылына башлаған күңелдәргә рәхәтлек биреп, ерҙең ҡарҙан әрселгән урынында сығып килгән был матур сәскә, ысынлап та, әле генә тормошҡа аяҡ баҫҡан әҙәми затты хәтерләтә. Сәскәләй балалар, үҫмерҙәр - йөҙҙәренән сафлыҡ бөркөлгән, шат йылмайып балҡыған матур-матур ҡыҙҙар һәм малайҙар йыш ҡына күҙ алдыма килә... Яҡты донъяның төмән тоя башлаған, әммә әлегә татып өлгөрмәгән шул йәштәр өсөн сикһеҙ һөйөнәм, уларҙы ялан тултырып, күҙҙең яуын алып торған умырзаяға оҡшатам, күңелдәргә моң килә:

*Боҙ ҡатлауы ирегәс,*
*ер өҫтөнә умырзая сыға, ҡарағыҙ:*
*Умырзая сыға, умырзая ҡалҡа,*
*умырзая һуҙа һабағын…*

Үҫеп етеп, балиғ булғас, күптәр үҙенә ишен табып, йылы тойғоларын, "тәүге мөхәббәт" хистәрен берберенә аңлатыр өсөн иң матур һүҙҙәр һайлай... Ваҡыты еткәс, егетелән ил алдындағы бурысын үтәргә әрме хеҙмәтенә китә. Ә инде вәғәҙә биреп оҙатып ҡалған ҡыҙҙар һалдатын әрменән өҙөлөп көтөп алыуҙы ла ҙур бәхеткә һанай. Һөйөү тулы ялҡынлы һүҙҙәре, бәхетле киләсәк хаҡында хыялдары бер-берененә яҙышҡан хаттарында сағыла. "Һине көтәм, бәғрем, имен-һау ғына ҡайт инде..." "Ғүмер буйы бергә булһаҡ, беҙҙән дә бәхетле кеше булмаҫ, йәнем. Көн-төн тик һинең хаҡта ғына уйланам. Дембелгә лә ике ай ҡалып бара..."

Ниһайәт, йәшәү дәрте ташып торған мыҡты, матур һалдат әрменән ҡайтып төшә. Сәскәләй наҙлы, тулышып бешкән сейәләй һылыу ҡыҙы уны ҡаршы ала. Уларының имен-һау ҡайтыу шатлығынан ата-әсәһе ауылдаштарын йыйып, оло туйҙай мәжлес үткәрә. Хәрби комиссариатта иҫәпкә тороп, бер аҙ ғына ял итеп алғас, күңеленә хуш килгән берәй кәсеп табып, егет ҙур дәрт менән эш башлай. Әрменән көтөп алған әлеге ҡыҙы уның яусы ебәреренә лә шикләнмәй. Ахырҙа, алдан һөйләшеп, килешеп ҡуйған көндә, ҡыҙ өйөнә яусы килә. Туй үткәреп, шатлыҡлы хистәр кисергән ике йөрәк бергә ҡушыла, татыу ғаилә төҙөп, йәшәй ҙә башлайҙар. Бала-сағалы булып, бәхетле, етеш ғүмер итергә хыяллана, ҙур-ҙур пландар ҡора улар. Йәш ир ата йортонаң төкәтмәһе менән генә мөрхәтһенмәй, ҙур, матур айырым йорт төҙөү хаҡында, тиҙерәк үҙаллы булырға - ата-әсә ҡарамағынан сығырға хыяллана. Арзаныраҡ, бер аҙ тотонолған "Жигули"ҙә әкренләп йөрөп яткан ҡайһы бер олораҡ ағайҙарҙың кәңәшен дә тотмай, кредитҡа ҡыйбатлы машина ла алып өлгөрә...



*Боҙ ҡатлауы кәүек көнкүрештән*
*сығаһым да килә тиҙерәк*
*Умырзая кәүек, умырзая кәүек,*
*умырзая кәүек тиҙ үрләп…*

Тик, һәр саҡ әҙәм балаһын һағалаусы мәкерле шайтан - Иблес ялсыһы йоҡлап ятмай. Күберәк йәштәр тирәһендә уралғылай күҙгә күренмәгән был ҡәһәрле зат. Эштән арып, ғаиләһенә ашыҡҡан иргә әлегерәк үҙе әсир иткән бер-ике әшнәһен ебәрә. "Ҡара, һин теге, кәләш алдым тигәс тә, эреләнеп китмә әле, әллә беҙҙе уважайт итмәйенме?" - ти күҙҙәре ҡыҙарып, шешмәкләнгән, ҡулдары ҡалтыранған, исҡерәк кейемдәге таныштары бер аҙ "ашап алырға" өгөтләй. "Ҡуйығыҙ, егеттәр, мине өйҙә кәләш көтә, унайһыҙ булыр ул..." "Әллә ғүмер буйы бисә һаҡлап ултырырға йыйынаһыңмы, дембеленде лә йыуҙырманың әле..." тип, ай-вайына ҡуймай, мужиктарҙың береһенен өйөнә егетте алып инеп тә китәләр. Инде ике-өс йыл тирәһе ҡатын-ҡыҙ ҡулы теймәгән был йорт эсе, ауылса әйткәндә, "эт ояһына" әйләнгән (унған хужабикәһе тап ана шул ике-өс йыл элек был өйҙән сығып киткән). Айҙар буйы йыуылмаған, насар еҫ аңҡыған өйҙөң иҙәне уртаһында торған иҫке түңәрәк өҫтәл өҫтөндә буш шешәләр, стакандар тулған, ҡатҡан икмәк һыныҡтары, бер-ике баш һуған тәгәрәгән. Өҫтәл тирәләй тояҡтары ҡумшыған бер нисә ултырғыс тора. Иҫке түшәгә өҫтөнә керләнеп бөткән тышһыҙ юрған түшәлгән тимер карауат һәм мөйөштә торған, ҡасандыр уҙған быуатта "дефицит" һаналған шифоньерҙан башҡа өй йыһазы ла күренмәй. "Кунаҡсыл" хужа ҡулындағы пакетынан бер "полторашка" бурыҡлаһып торған сәмәй килтереп сығарып, өҫтәлгә ҡуя. Түбән остағы көмөшкәсе әбейгә утын ярып, эш хаҡы урынына алған икән...

Төн уртаһы үткәс кенә ир өйөнә ҡайтып, кәләшенең тәмле итеп бешергән ашын, һөтлө сәйен дә татымаған көйө караутҡа ауа. Иренән наҙлау көткән йәш ҡатын уның ауыҙынан сыҡҡан насар еҫтән ерәнеп, икенсе яғына боролоп ята... Иртәгеһен башы "зыңҡыған" хужаның ашау ҡайғыһы ла юҡ, бер сүмес һыу эсеп, эшкә китә. Кисен ҡайтып, йәш кәләше алдында ғәфү үтенә. Күпмелер ваҡыт һин дә-мин йәшәп алалар, әммә бер-ике айҙан әлеге хәл тағы ҡабатлана. Торған һайын йышыраҡ була башлаған был хәлгә ризаһыҙлығын белдерергә йөрьәт иткән, инде бөпәй табырға ла күп ҡалмаған кәләшенә ир ҙә айбарлана башлай. Йылдар буйы бер ҡайҙа ла эшләмәгән әлеге "дуҫтары" юхалап, йыш ҡына "кеҫәһенә төшкәләгәнгә" күрә, кәләшкә алып ҡайтҡан эш хаҡы кәмегәндәнкәмей. Медицина теле менән әйткәндә, алкоголизм сиренең бер стадияһына бик тиҙ барып етә ир. Кәләше бала табыу йортона ингәс, уны һәм тыуысаҡ сабыйын түҙемһеҙлек менән көтөп ала, тик... әле генә атай булған был кеше улы тыуыу шатлығынан, уны "йыуып", сираттағы мәртәбә "ысҡынып" китә. Башта "бахмурҙан", унан бер аҙ "төшөргән" килеш эш урынында күренгеләгән, "прогул"дар ҙа яһай башлаған эшсеһен хужа эшенән бушатырға мәжбүр була. Иҫерек килеш руль артында өр-яңы автомобилен дә түңкәреп ватып, үҙе нисектер иҫән ҡалған ир ҙур суммалы кредит һаҙлығына бата...

Тормош юлында тамам аҙашҡан кеше менән башҡаса бергә йәшәр әмәл ҡалмағас, йәш ҡатын, ҡайнышҡәйнһенең өгөтләүенә лә ҡарамай, инде "ай-һай" тороп, "әттә", "әзә", "мәм-мәм" тип тәтелдәй башлаған балаһын алып, үҙенең ата-әсәһенә ҡайтып китергә ҡарар итә. Кәләше әйберҙәрен йыйып, машина яллап, тыуған ауылына күсенеп киткәнен дә күрмәй ҡала әшнәһенең бысраҡ өйө иҙәнендә ләҡылд булып йоҡлап ятҡан ир. Уға хәҙер ашығыс рәүештә айнығырға, төҙәлергә ынтылыу кәрәк ине лә бит. Әммә, шундай гүзәл ҡатынын, улын хәмергә алыштырған был атай кеше хәҙер инде "ҡайғыһын йыуып", артабан да упҡын төбөнә тәгәрәй, туҡтала алмай әсә торған "алкашҡа" әйләнә, тураһын әйткәндә, "кешелектән" сыға...

*Умырзая бик тиҙ үҫеп сыға,*
*тик аҙ ғына йәшәй турайып,*
*Умырзая бик тиҙ башын аҫҡа эйә,*
*умырзая һулый моңайып…*

Тирә-яғыбыҙға баҡһаҡ, бына шундай ҡайғылы ахыры булған йәштәребеҙ аҙмы ни? Тормош башында ғына араҡы ҡолона әйләнеп, Аллаһ тарафынан бер мәртәбә бирелә торған ғүмерен сыралай яндырып, заяға үткәргән йәштәр һәр ауылда бар! Үкенесле, әммә күп кенә матур-матур йәштәребеҙ тормош юлын әле генә сәскә атҡан умырзая һымаҡ матур итеп башлап та, ғүмерҙең "ҙур сәскәле" йәйенә тиклем йәшәмәй, араҡынан ағыуланыу арҡаһында яҡты донъянан китеп тә бара. Шул сәбәпле, хатта бер ғаиләнән генә бер нисә кеше бер-бер артлы үлгән миҫалды кем белмәй! "...Әсәй, үлеп барам, ҡотҡар мине! Йәшәгем килә, әсәкәйем!.." - тип тилмереп, "ашығыс ярҙам" килеп етмәҫ борон әсәһенең ҡулында йөрәге туҡтаған йәштәребеҙ аҙмы ни? Эйе, Раббыбыҙ ихтыяры менән әсә ғүмер бирә, әммә, ғәзизен нисек кенә һөйөүенә ҡарамаҫтан, был ағыуҙан ҡотҡарырлыҡ көсө юҡ уның... "Умырзая"ның авторы Әхмәт Фәйзи, бәлки, тап бына шулай фекерләгәндер ҙә, ана шундай аяныслы хәлгә тарыған бәғзе берәүҙе ҡыҙғанғандыр. Хатта күҙ йәштәрен түгә-түгә яҙғандыр ул ошо шиғырын тип тә уйлап алам мин ҡайсаҡ. Артабан йырын бына нисек тамамлап ҡуя шағир:

*Юҡ, мин йәшәр инем оҙаҡ, оҙаҡ,*
*минең килмәй улай булаһым:*
*Умырзая кәүек, умырзая кәүек,*
*умырзая кәүек һулыйһым…*
*Юҡ, мин йәшәр инем йәй яһаус*
*ҙур сәскәләр менән йыйылып.*
*Юҡ, мин үлмәҫ инем умырзая кәүек,*
*умырзая кәүек бойоғоп…*

Ниндәй генә булһа ла ауыл зыяратына барып, ҡәберҙәрҙәге яҙыуға - тыуған һәм үлгән даталарға иғтибар иткәнегеҙ бармы, ҡәҙерле дуҫтар? Зыяраттарыбыҙ йәштәр ҡәбере менән тулған бит, йәмәғәт! Иҫке ҡәбер әһелдәренең башлыса 70-75, унан да арыраҡ йәшәгәнен күрһәк, һуңғы ярты быуатта егерме-утыҙға вафат булғандар күбәйгән! Күпселек үлемдең сәбәбе тап ана шул эскелек булыуы бер кемгә лә сер түгел.

Эйе, илебеҙ ҡанундары буйынса, эсеү тыйылмаған, магазиндарҙа ла матур-матур шешәләргә ҡойолған хәмер тулып ултыра. Кемдәрҙер унан матди файҙа, ҙур килем дә ала. Өй шарттарында ла уны ҡыуыусылар етерлек. Уның бөтә кешелек донъяһына ебәрелгән афәт икәнлеген дә, йәмғиәтебеҙҙең, хөкүмәтебеҙҙең дә уға ҡаршы көрәшеүен яҡшы беләбеҙ. Үкенескә, нисек кенә тырышһаҡ та, бөтә ил күләмендә был йән ағыуын тиҙ арала бөтөрөп булмаҫтыр. Әммә Раббыбыҙ беҙгә был үлемесле шыйыҡсаны эсеүҙе ҡәтғи тыйған! Ауыҙыбыҙға уны көсләп тә ҡоймайҙар. Ябай ғына итеп әйтһәк, үҙ үлемен аҡса биреп һатып ала әҙәм балаһы. Үҙенең башына килгән шул оло бәләгә кеше тик үҙе генә гәйепле. Ҡәҙерле йәштәр, уландарым, ҡыҙҙарым, милләттәштәрем, шайтан хәсәтенә бирелмәгеҙсе, зинһар өсөн! Аллаһ Тәғәлә тарафынан тик бер генә мәртәбә бирелгән сәскәләй ғүмерҙең ҡәҙерен белегеҙ!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Хәҙерге көндә Өфө II тип нарыҡланған урында 1500 самаһы йыл элек ҡаласыҡ булыуы күптәргә мәғлүм. Борон был ерҙә Башҡорт тип аталған ҡала ла булған.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БУЙЫ ОҘОНОРАҠ КЕШЕЛӘР...

## ышанысты тиҙерәк яулай

■ Кеше насар елләтелгән бүлмәлә кислород етешмәүҙән иҫнәй башлауы күптән билдәле. Шулай ҙа иҫнәү булдырыусы сәбәптәр әлегә тиклем асыҡланып бөтмәгән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йоҡо килгәндә, арығанда баш мейеһендә тотҡарланыу процестары ярһыу билдәләренә ҡарағанда өҫтөнлөк ала бара. Һөҙөмтәлә, организмдың ҡайһы бер функциялары, шул иҫәптән һулыш алыу ҙа тотҡарлана. Ул һирәгерәк, өҫтөнөрәк була бара, шуға ла ҡанда углекислота һәм матдәләр алышыныуҙың башҡа продукттары йыйыла. Баш мейеһенең һулыш алыу үҙәктәренә тәьҫир итеп, улар иҫнәү тыуҙыра. Әйткәндәй, иҫнәү башҡа кешегә йоғоусан. Ул көләү кеүек үк, күршегеҙгә шунда уҡ йоғоп, ул да иҫнәй башлаясаҡ.

■ Мадрид университеты ғалимдары һуғандың ҡабығында сәләмәтлек өсөн файҙалы матдәләр күплеген асыҡлаған. Һуғандың ҡабығы һәм һоро төҫтәге өҫкө ҡатламы флавоноидтарға, ә беҙ ҡырҡып ташлаған ғәҙәттәнгән аҫҡы өлөшө көкөрт берләшмәләре һәм фруктоза полимерҙарына бай. Шуға ла ғалимдар аҙыҡ әҙерләгәндә уны кверцетин кеүек фенол берләшмәләре һәм флавоноидтар менән тулыландырыуы өсөн һуғандың һоро ҡатламын да ҡулланырға тәҡдим итә. Был йөрәк-ҡан тамырҙары, ашҡаҙан, эсәк яман шеше, икенсе типтағы диабет, һимереү кеүек ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Фенол берләшмәләренең канцероген процестарҙан һаҡлауы ла билдәле.

■ Америка психологтары белдереүенсә, кешенең лидерлыҡ һәләттәре уның буй оҙонлоғона бәйле. Бынан тыш, мәҙәниәт һәм тәрбиә кимәленә ҡарамайынса, бар кешеләр ҙә оҙон буйлыларға тиҙерәк ышана икән. Ғалимдар миҫал итеп Барак Обаманы килтерә. Буйы 185 см булған сәйәсмән үҙенән 13 сантиметрға бәләкәйерәк булған Джон Маккейнды һайлауҙар ваҡытында уҙып китә. Техас штатының технологик университеты ғалимы Грег Мюррей фаразлауынса, 2012 йылдағы һайлауҙарҙа милли партия кандидаты Митт Ромниға халыҡ күберәк тауыш бирәсәк, сөнки ул Обамаға ҡарағанда 3 сантиметрға оҙонораҡ. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, боронғо кешеләр башлыҡтар һәм Аллаларҙың фигураларын ябай кешеләр кәүҙәһенә ҡарағанда оҙонораҡ итеп һүрәтләгән. Студенттар араһында үткәрелгән һорау алыуҙарҙа 64 процент осраҡта лидерҙар ябай кешеләрҙән оҙонораҡ булып сыҡҡан.

■ Торонто (Канада) университеты ғалимдары белдереүенсә, сит телдәр өйрәнеү Альцгеймер ауырыуы билдәләре барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. Тикшереү барышында ғалимдар был ауырыуҙың беренсе билдәләре булған пациенттарға томографик тикшеренеү үткәрә. Тәжрибәлә ҡатнашыусыларҙың барыһының да белем кимәле бер тигеҙ була, әммә уларҙың яртыһы сит телдә иркен һөйләшә, икенсе яртыһы бер ниндәй ҙә сит тел белмәй. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, сит тел белгән кешеләрҙә Альцгеймер ауырыуы билдәләре һуңыраҡ барлыҡҡа килә. Быны ғалимдар шулай аңлата: кеше бер телдә аралашыуҙан икенсеһә күсеп, даими рәүештә мейе әүҙемлеген һаҡлап ҡала. Шулай уҡ артыҡ ауырлыҡ, юғары ҡан баҫымы, диабет, депрессия, тәмәке тартыу, физик һәм аҡыл күнекмәләре булмауы аҡыл зәғифлегенә килтерә.

ӨФӨ ҠӘЛҒӘҺЕНӘ - 450 ЙЫЛ

# КҮРГӘҘМӘЛӘ...

## мәркәзебеҙҙең бай тарихы




**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһының Милли архивында "Өфө быуаттар аша" тип аталған күргәҙмә асылды.**

● Архив документтарында яҙылыуынса, Рәсәй батшаһы Иван Грозный "күсмә халыҡтарҙың аяуһыҙ талауынан миктәгән башҡорттарҙың үтенесе буйынса" 1574 йылдың май айында воевода Иван Нагойҙы стрелецтары менән ҡәлғә төҙөргә ебәрә. Өфө йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған ерҙә, ярымутрауҙа, йәғни бар йәһәттән дә уңайлы урында төҙә ағастан ҡәлғә, Троицк сиркәүе, йорттар һәм хужалыҡ ҡаралтылары ҡалҡып сыға.

Ләкин баш ҡалабыҙҙың тарихы күпкә байыраҡ. Хәҙерге көндә Өфө II тип нарыҡланған урында 1500 самаһы йыл элек ҡаласыҡ булыуы күптәргә мәғлүм. Борон был ерҙә Башҡорт тип аталған ҡала ла булған. П.И. Рычков фекеренсә, "Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем үк бында Таратау исемле ҙур ғына ҡала булған. Башҡорттар яңы ҡәлғәне, ул имәндән төҙөлгәнлектән, Имәнҡала тип тә йөрөткән". Әммә быуаттар үткәс, халҡыбыҙ оҙаҡ йылдар монгол илбаҫарҙары баҫымы аҫтында йәшәргә мәжбүр була. Аптырағандың көнөнән башҡорт ырыуҙары башлыҡтары, ил-йорт менән кәңәш ҡороп, Урыҫ дәүләте ҡосағына һыйынырға ҡарар итә.

Иван Нагой яңы ҡаланың хакимиәте ролен үтәгән Өфө приказ йорто менән етәкселек итә. Уға 150-200 стрелецтан торған хәрби гарнизон буйһона. Ҡала диуары буйлап посадтар барлыҡҡа килгәс, ҡәлғә Кремль тип атала башлай. Был ҡәлғә-ҡала сит-ят саплыҡынсыларҙан һаҡлау өсөн генә түгел, артабанғы йылдарҙа Ағиҙел, Өфө (Ҡариҙел) һәм башҡа йылғалар буйлап төрлө тарафҡа йөк ташыуҙы еңеләйтеү өсөн порт булараҡ та хеҙмәт итә.

● Йылдар үтә тора, ҡала ла үҫә бара. Хозур тәбиғәтле, ундырышлы ергә һәм йәнлектәргә бай төбәкҡә ымһынып, Рәсәйҙең үҙәк өлөшөнән төрлө милләт вәкилдәре күсеп килә башлай. Өфөлә яңы административ биналар, йорттар, сиркәүҙәр һалына. Аҫаба ерҙәрҙә заводтарға нигеҙ һала башлаған түрәләрҙең сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдереп, башҡорттар әленән-әле баш күтәреп тора. Өфө ҡәлғәһен нығытыу тураһында 1728 йылда батша әмеренең донъя күреүе күп нәмә тураһында һөйләй.

Заман башҡа - заң башҡа, тиҙәр бит. Башҡорттарҙы сит-ят баҫҡынсыларҙан һаҡлау һәм яҡлау өсөн төҙөлә башлаған Өфө ҡәлғәһе, тора-бара үҙенең төп тәғәйенләнешен үҙгәртеп, аҫаба халыҡты ныҡлы күҙәтеү аҫтында тотоу ҡоралына әүерелә.

● Дәүеренә ҡарап, ҡаланың статусы ла даими үҙгәреп тора. Мәҫәлән, Ҡаҙан губернаһы составында ул башта Өфө провинцияһы (1719-1728), 1781 йылдан Өфө наместниклығы, артабан Ырымбур губернаһының (1796-1865) үҙәге була. Ә инде 1865-1922 йылдарҙа Өфө губернаһының мәркәзе ролен үтәй.

Рәсәйҙең сиктәре көнсығышҡа табан киңәйгән заманда Өфө, дошмандарҙан һаҡланыу ҡәлғәһе булыуҙан туҡтап, әкренләп өйәҙҙең сауҙа, кәсепселек һәм административ ҡалаһына әүерелә.

● Ул дәүерҙә Өфөнөң Рәсәйҙә ниндәй әһәмиәткә эйә булыуы тураһында йәнә бер факт һөйләй: Өфө наместнигы О.А. Игельстромдың үтенесе буйынса Екатерина II 1788 йылдың 22 сентябрендә ҡул ҡуйған указ буйынса Өфө наместниклығы һәм Ырымбур губернаһы мосолмандарының Диниә назараты төҙөлә. Уны асыу тантанаһы Өфөлә 1789 йылдың 4 декабрендә була. Артабан был Диниә назараты Рәсәй күләмендәге ҙур дини ойошмаға әүерелә, ул Башҡортостандың баш ҡалаһында бөгөнгәсә эшмәкәрлеген дауам итә.

● Өфө һәм Ырымбур өлкәләрен бергә ҡушып, Өфө наместниклығын булдырыу һәм уларҙы өйәҙҙәргә бүлеү тураһында (1781), губерна ҡалаһына яңы проект планы төҙөү (1817), Өфөлә йәмәғәт китапханаһы асыу (1836), Өфөлә губернатор йорто төҙөү (1849), йәмәғәт банкы асыу (1876), Ырымбур губернаһын Өфө һәм Ырымбур губерналарына бүлеү (1865) тураһында һөйләгән күргәҙмә документтары - ҡала йылъяҙмаһының бай мәғлүмәтле биттәре.

1859 йылда Ағиҙел һәм Өфө йылғаларында суднолар йөрөй башлауы Өфө сауҙагәрҙәренә Рәсәйҙең төрлө төбәктәре менән сауҙа эшен әүҙемләштерергә булышлыҡ итә. Ә инде Һамар-Златоуст тимер юлы төҙөлөп бөтөп, 1890 йылда Өфө аша үтеүе губерна баш ҡалаһын һәр яҡлап үҫтереүгә ҙур этәргес яһай.

XX быуат башындағы Өфө тарихын донъя пролетариаты юлбашсыһы Владимир Ленинһыҙ күҙ алдында килтереп булмай. Уның ҡатыны Надежда Крупская 1900-1901 йылдарҙа беҙҙең ҡалала һөргөндә була. Ленин 1900 йылдың февраль һәм июнь айҙарында, Өфөгә хәләл ефете янына килгән саҡтарында, "Искра" гәзитен һәм партияның терәк пунктын булдыра. 1917 йылда Рәсәйҙә бойомға ашырылған Октябрь түңкәрелешенә юл Өфөнән башланғандыр, тип тә әйтеп булалыр.

● Граждандар һуғышы йылдары Өфө өсөн оло һынау осоро була. Ике йыл эсендә ҡалала ҡан ҡойошло яуҙар барышында власть аҡтарға ла, ҡыҙылдарға ла күсә. 1919 йылдың 9 июнендә легендар командир Василий Чапаев дивизияһы, ниһайәт, баш ҡаланы колчаксыларҙан азат итеүгә ирешә.

Башҡорт автономиялы республикаһының мәркәзе 1919 йылдың мартынан Стәрлетамаҡта була. Бөтөн Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитеты декреты буйынса БАССР Өфө губернаһы менән ҡушылғас, 1922 йылдың 14 июнендә Өфө Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының баш ҡалаһы тип иғлан ителә.

● Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илебеҙҙең көнбайыш ҡалаларынан Өфөгә байтаҡ завод-фабрика, учреждение һәм ойошмалар эвакуациялана. СССР өсөн үтә ауыр осорҙа БАССР-ҙың баш ҡалаһы фронт өсөн бик тә кәрәкле һуғыш ҡоралдары етештереү буйынса ҙур индустриаль үҙәккә әүерелә. Өфө хеҙмәтсәндәренең тылдағы фиҙаҡәр хеҙмәте, байтаҡ йылдар үткәс булһа ла, лайыҡлы баһаланды - 2020 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһы "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән юғары исемгә лайыҡ булды.

● Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Өфөлә нефть химияһы сәнәғәте, төҙөлөш тармағы йылдам үҫеш кисерә, яңы уҡыу йорттары, мәҙәниәт усаҡтары, парктар, скверҙар барлыҡҡа килә. Нефть эшкәртеү заводтарында етештерелгән продукция баш ҡалабыҙҙы тотош илдә киң таныта.

● Үткән быуаттың 60-80-се йылдарында Өфө тағы ла йылдамыраҡ үҫеш кисерҙе: был дәүерҙә сәнәғәт, төҙөлөш, фән, мәҙәниәт, сәнғәт һәм спорт объекттары, торлаҡ йорттар күпләп төҙөлә.

1980 йылдың 12 авгусында баш ҡалабыҙҙа миллионынсы кеше теркәлә.

2015 йылда ҡалабыҙҙа БРИКС, ШОС кеүек донъя кимәлендәге симпозиумдар уҙғарылды. Бер нисә тиҫтә йыл инде Өфөбеҙҙә Халыҡ-ара, Бөтөн Рәсәй кимәлендә сәнәғәт, фәнни, мәҙәни һәм спорт саралары даими үтеп тора.

● Хәҙерге көндә туристик үҙәккә әүерелә барған Башҡортостандың баш ҡалаһы - илебеҙҙең иң ылыҡтырғыс ҡалаларының береһе. Өфө - башҡорт халҡының мәҙәниәтен, рухиәтен, тарихын һаҡлаған һәм үҫтергән баш ҡалабыҙ, донъя һәм илебеҙ кимәлендә Башҡортостандың төп танытмаһы ул!

Евразия йөрәге булып танылған күркәм ҡалабыҙҙың бай тарихы тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, боронғо карталар, китаптар, фотоһүрәттәр менән танышырға теләгән һәр кемде Милли архивтың Совет урамындағы 7-се йортта урынлашҡан күргәҙмә залында көтәбеҙ.

**Ниязбай СӘЛИМОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Өфөлә "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Юлдаш Plus" үҙәге ишектәрен асты. Был майҙансыҡ йәш быуын өсөн күптән көтөлгән бүләк булды, унда уларға үҙҙәренең ижади идеяларын тормошҡа ашырырға, аралашырға һәм медиапродукцияны туған телдә сығарырға мөмкинлек биреләсәк.**

# ЙӘШТӘРГӘ...

## аралашыу өсөн мөмкинлек

Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Азат Баҙранов етәкселегендәге сарының абруйлы ҡунаҡтары символик ҡыҙыл төймәгә баҫып, яңы проектҡа старт бирҙе.



- Һис шикһеҙ, бындай майҙансыҡтарҙы асыу мөһим. "Юлдаш" радиоһы һәм Башҡортостан юлдаш телевидениеһы етәкселегенә йәштәр йыйыла, яҙҙыра, саралар үткәрә алырлыҡ үҙәк асыу башланғысы өсөн рәхмәтлемен. Беҙ - йәштәр күп йәшәгән төбәк. Улар төрлө, талантлы, ижади. Өлкәндәр, етәкселек йәштәрҙең буш ваҡытын ҡайҙа үткәреүе һәм уларҙың потенциалын тормошҡа ашырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бармы-юҡмы икәнлеге хаҡында хәстәрлек күрергә тейеш. Бындай майҙансыҡ, тәү сиратта, йәштәребеҙгә ижади потенциалын асырға мөмкинлек бирер, тип иҫәпләйем, - тип билдәләне Азат Баҙранов.

Мауыҡтырғыс проекты асыу тантанаһы Радио көнөнә һәм 2014 йылдың 1 сентябрендә "Юлдаш" радиоһы нигеҙендә тапшырыуҙар башлаған "Юлдаш Plus" радиоһының юбилейына арналды. 10 йыл эсендә радиостанция тыңлаусыларҙы эфир тапшырыуҙары менән генә ҡыуандырманы, ә республиканың ижади йәштәренә әүҙем ярҙам күрһәтте, милли эстраданы үҫтереүгә булышлыҡ итте, баш ҡала медиаөлкәһе өсөн йәш кадрҙар әҙерләүгә тос өлөш индерҙе.

- "Юлдаш Plus" - ул йәштәрҙең башланғысы тураһында тарих. Беҙҙең башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары йыйылып, үҙҙәренең радиостанцияһы булырға тейеш тип ҡарар итте. 10 йыл элек компанияның ул саҡтағы етәкселеге ярҙамы менән асылған "Юлдаш Plus" коллективында иң яҡшы радиожурналистар йыйылды, - тине "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы директоры Рөстәм Зәрәфетдинов. - Хәҙер үҙебеҙҙең Йәшлек-хаусыбыҙ барлыҡҡа килде һәм, миненсә, беҙгә лә шәп проекттар эшләргә теләүселәрҙән сират хасил буласаҡ...

Яңы үҙәк йәштәр өсөн ҙур мөмкинлектәр аса. Телеүҙәк эсендә йәштәр үҙҙәре ремонтлаған яңы бинала осрашыуҙар, оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә планлаштыра. Бында буласаҡ һөнәрҙе билдәләү өсөн кәрәкле ҡорамалдар бар. "Юлдаш Plus"та Өфө фән һәм технологиялар менән Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары эшләй, улар редакция хеҙмәткәрҙәре ҡанаты аҫтында тәжрибә туплай.

- Радио бер ҡасан да бер урында тормай, ул һәр ваҡыт үҫешә. 2000 йылда "Юлдаш" радиостанцияһы, 2010 йылда "Ашҡаҙар" радиоһы асылды, 2014 йылда заман сағырыуы буйынса "Юлдаш Plus" интернет-радиоһын булдырҙыҡ, ул Өфөнөң һәм республиканың бөтә ижади йәштәрен үҙ янына йыйҙы. Был ваҡыт эсендә бик күп музыкаль акциялар, хит-парадтар, республика масштабындағы фестивалдәр үткәрелә. Хәҙер үҙ эшмәкәрлеген киңәйтергә ваҡыт етте. Бында ижади йәштәр менән эшләргә әҙер инициативалы кешеләрҙе күреүебеҙгә шатбыҙ, - тип һөйләне "Юлдаш" радиоһының баш мөхәррире Миләүшә Йәғәфәрова.

БАҠСА



# Ә БЫЛ СЕРҘӘР...

## мул уңышҡа нигеҙ

**Профессиональ баҡсасылар бәләкәй генә биләмәлә лә мул уңыш үҫтереп була, ти һәм иң ҡулайлы серҙәре менән бүлешә:**

- Юғары уңышҡа өлгәшеүҙең иң төп сере - яҡшы сифатлы тупраҡ. Ерҙең уңдырышлылығы уның органик ашламаларға ни тиклем бай булыуына бәйле. Тупраҡ ҡатламын органик ашламалар менән тәрәнерәк туйындырған һайын - уңышы мулыраҡ. Тамыры нисек - емеше шулай.
- Түтәлде бейегерәк эшләгән һайын, уңышты күберәк йыйырһың. Бының өсөн баҡса ерен ике тапҡыр яҡшылап ҡаҙырға кәрәк. Тупраҡ 60 см тәрәнлектә йомшартылып, түтәл 5-25 см ҡалҡып торорға тейеш. Бейек түтәлдәрҙә үҫентеләрҙе бер-береһенә яҡыныраҡ ултыртырға мөмкин. Был бер-береһенең күләгәһенән дә һаҡлаясаҡ, һыу һипкәндә һыуҙы ла буш ергә сарыф итмәйәсәк.
- Баҡсаны түтәлдәр серияһында планлаштырыу ер майҙанын экономиялауға булышлыҡ итә. Ә рәтләп ултыртҡанда рәт аралары өсөн ҡалдырылған урын әрәм була. Түтәлдәрҙе ағас рам эсенә яһау айырыуса файҙалы - ашлама һәм һыу ситкә китмәй.
- Түтәлдәрҙең ниндәй булыуы ла әһәмиәтле. Түңәрәк түтәлдәр отошло. Сит-ситтәре буйлап үрмә йәшелсә һабаҡтары ла, салат, шпинат япраҡтары ла иркен үҫә ала.
- Түтәл өҫтөнә үҫемлектәрҙе дөрөҫ ултыртырға кәрәк. Белгестәр уны рәтләп йәки дүрткел итеп ултыртырға кәңәш итмәй. Өсмөл итеп урынлаштырған хәлдә һәр түтәлдән 10-14 процент күберәк уңыш алырға мөмкин.
- Үҫентеләрҙе тығыҙ ултыртыуҙан һаҡланығыҙ. Яҡын сәселгән йәшелсәләр бер-береһенә үҫергә ҡамасаулай һәм ашламаларҙы тулыһынса үҙләштерә алмай. Шулай уҡ ҡороҡтос бөжәктәр, ауырыуҙар күсешендә лә тиҙерәк бирешә.
- Бер миҙгел эсендә бер үк түтәлдә бер нисә йәшелсә үҫтерә белеү күп төрлө уңыш алыуға килтерә. Мәҫәлән, иртә яҙҙан ултыртыла торған салатты үҙ мәлендә файҙаланып, урынына тиҙ өлгөрөүсән кукуруз сәсергә мөмкин. Бынан һуң ул ерҙе яҡшылап таҙартып, ҡышлаусы һарымһаҡ ултыртырға була. Әммә һәр сәсеү араһында тупраҡҡа ашлама индерергә кәрәк.
- Бөтә йәшелсәләрҙе лә иң тәүҙә үҫенте рәүешендә үҫтереп алыу отошло. Түтәлгә сығарып ултыртҡанға тиклем ул ныҡ ғый һәм, күләгәләр хасил итеп, сүп үләндәренә үҫергә ҡамасаулай.
- Ерҙе бер ҡасан да ныҡ ел булғанда ҡаҙмағыҙ: тупраҡ дымы кибә. Шулай уҡ ямғырҙан һуң да ерҙе һөрөү, ҡаҙыу файҙаға түгел - һыу тәрәнгә үк һеңеп бөтөргә тейеш.
- Яҙ көнө ерҙе ашлап, түтәлдәр яһап бөткәс тә орлоҡ сәсергә йәки үҫенте ултыртырға ашыҡмағыҙ, сүп үләндәре сыҡҡансы көтөп тороғоҙ. Уларҙы утағандан һуң ғына сәсеү эшенә тотоноғоҙ.
- Ултыртҡан борсаҡтарығыҙҙы ҡоштар ашамаһын тиһәгеҙ, сәсерҙән алда уларҙы һарымһаҡ төнәтмәһенә тығып алығыҙ.
- Яҙ һайын ҡыуаҡтың өс-биш кенә тармағын ҡалдырып, ҡалғандарын төбөнән һындырып торһағыҙ - ул шау сәскә атасаҡ.
- Иртә яҙҙа башлы һарымһаҡ ултыртҡанда тырнаҡтарын сәсерҙән алда ғына айырығыҙ, юғиһә, шытмай ҡалыуы ихтимал.
- Һуған ултыртҡан түтәлдә һуған себендәренән ҡотолорға теләһәгеҙ, яҙ көнө ерҙе ҡаҙғанда тоҙ һибегеҙ. Йәй тағы ла өҫтәгеҙ. Тағы бер алым: һуған менән кишерҙе йәнәш рәтләп сәсегеҙ (һуған-кишер, һуған-кишер)- улар бер-береһен ҡороҡтостарҙан һаҡлай.
- Әгәр ҙә ҡыяр түтәленә әҙ генә көнбағыш сәсһәң - ҡыярҙың уңыш биреү ваҡыты оҙайыр һәм мул уңыш бирер.
- Баҡсағыҙ төнгө һалҡынға бирешмәһен өсөн, кисен түтәлдәргә яҡшылап һыу һибеп ҡуйығыҙ.
- Картуф баҡсаһын көҙ көнө үк тиреҫ менән яҡшылап ашлағанһығыҙ икән - эрерәк бүлбеләр сәсегеҙ, әгәр тиреҫ етерлек кимәлдә түгел икән - вағыраҡ бүлбеләрҙе һайлағыҙ һәм уларҙы бер-береһенә яҡыныраҡ ултыртығыҙ.
- Алмағас менән сейә ҡыуаҡтары араһын йыраҡ ултыртырға кәрәк. Уларҙың тамырҙары бер-береһенә насар йоғонто яһай.
- Шалҡанды ер ҡарҙан әрселгәс тә сәсеү хәйерле. Ул һалҡынға бирешмәй, әммә ер беттәре сыға башлағансы нығынып ҡалмаһа, зарар күрә. Әгәр иртә яҙҙан ултыртырға өлгөрмәгәнһегеҙ икән, июнь башына ҡалдырығыҙ - ул ваҡытҡа был ҡороҡтостар һирәгәйә, ә шалҡан көҙгә тиклем барыбер ҙурайып өлгөрә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Шулай ҙа тағы хәтерегеҙгә төшөрәм - энергияғыҙҙың юғары кимәленә етеү өсөн һеҙгә эске һәм тышҡы донъяғыҙҙы юғары тирбәлеш менән байытырға кәрәк. Әгәр аң кимәлегеҙҙе күтәрергә һәм ни өсөн бөйөк остаздар матди донъяға, иткә, эякуляцион оргазмдарға ҡыҙыҡһыныу юғалтыуын аңларға теләһәгеҙ, үҙегеҙ ошо кимәлгә етергә тейешһегеҙ.

Рухи остазығыҙҙың тормошо һеҙҙекенән күпкә яҡшыраҡ тип әйтергә мөмкинме? Юҡ, бары тик ул башҡаса. Мәсьәлә һеҙҙең нимәне һайлауығыҙға ғына бәйле.

Матди донъяла уйнап туйғас, ерҙәге мәшәҡәттәр арыҡтас, икенсе нәмәләрҙе белгегеҙ килә башлаясаҡ. Шул ваҡытта һеҙ яңы ҡарашҡа һәм юғары кимәлдәге тирбәлешкә эйә буласаҡһығыҙ.

Һеҙ әлегә ерҙә йәшәгәндә, барлыҡ көсөгеҙҙе иң ҡыйыу, баш етмәҫ теләктәрегеҙҙе тормошҡа ашырыуға йүнәлтегеҙ. Был тормоштан киткәндә эшләнмәгән эштәрегеҙ, үтәлмәгән хыялдарығыҙ ҡалмаһын өсөн, уларҙың барыһын да тормошҡа ашырырға тырышығыҙ.

### Уңышты арттырыусылар

Бизнес даоһы өс өлөштән тора:

1. Үҙегеҙ хыялланған бөтә нәмәне матдилаштырыу. Был концепцияны тәүҙә үк тикшерҙек.

2. Тормошоғоҙ менән идара иткән Йыһанығыҙҙың ете бөйөк ҡануны. Был хаҡта ҡыҫҡаса аңлатып үттек.

3. Ошо ҡанундарҙы арттырырға һәм теләктәрегеҙҙе тормошҡа ашырырға ярҙам иткән ҡоралдар һәм саралар. Беҙ уларҙы "уңышты арттырыусы" тип атайбыҙ.

Бындай ҡорал һәм саралар бик күп һәм улар тураһында бик күп китап яҙырға мөмкин булыр ине. Әммә әлегә уларҙың бер нисәһе менән генә танышып үтәйек.

### Ризыҡ

Кеше - нимә ашай, ул шул. Был турала бик күп ишеткәнегеҙ барҙыр. Ләкин мин уны икенсе төрләрәк әйтергә яратам: энергетик тирбәлештәр һеҙ нимә менән туҡланаһығыҙ, шул йышлыҡта бара. Нимә кейәһегеҙ - шул төҫтәр йышлығында, нимә тыңлайһығыҙ - шул йышлыҡта, нимә эскәйһегеҙ - шул йышлыҡта тирбәләһегеҙ. Теге йәки был диетаны көсләп тағырға теләгән рекламаларға ышанмағыҙ. Үҙегеҙ тәжрибә үткәрегеҙ һәм теге йәки был диетаның нисек йоғонто яһағанын анализлағыҙ.

Бер үк диетаны барыһына ла тәҡдим итеү бөтә балаларҙы ла бер генә предмет уҡытылған бер мәктәпкә йөрөтөү кеүек үк мәғәнәһеҙ. Бауыр күҙәнәге таҙ мускулдары күҙәнәктәре кеүек үҫмәй, уның ихтыяжы башҡа. Кешенең тәбиғәте ҡатмарлы һәм бер нисек тә бер төрлө була алмай. Шуға организмығыҙ менән тәжрибә үткәрергә саҡырам. Шәхси тәжрибәмдән сығып шуны әйтә алам - һөт, миндаль, манго, томаттар, арахис майы һәм тәбиғи йогурт - минең энергетикамды оптималләштереү өсөн иң яҡшы продукттар. Әммә һәр кем үҙенә тап килгән диетаны табырға тейеш.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 20 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 Д/с Премьера. "Обыкновенный фашизм-2". Фильм пятый. [18+]
1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]
2.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
2.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**10.45 Ҡурай даны. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Этно-краса. [6+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00, 20.30 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Наследство". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

## 21 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Антропология". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45, 18.00 Письма солдатам. [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Ат уйнатып. Битва командиров. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Бай. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [12+]**
**19.00, 20.30 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**23.00 КҮстәнәс. [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**3.45 Счастливый час. [12+]**
**4.30, 5.15 Телецентр. [12+]**

## 22 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". [16+]
2.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Автограф. [12+]**
**10.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 КультУра. [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00 Д/ф "Я должна была жить". [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Однажды в санатории". [12+]**
**3.30 Счастливый час. [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

## 23 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ищейка". Новые серии. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Свет в окне". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Версия". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ҡурай даны. [12+]**
**10.15, 17.15 История одного села. [12+]**
**10.30 Дорога к храму. [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Телецентр.**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**3.45 Счастливый час. [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

## 24 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!".
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Х/ф Премьера. "Дыхание". [16+]
23.40 Д/ф "Азнавур глазами Шарля". К 100-летию со дня рождения Шарля Азнавура. [16+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты".
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
4.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.35 "Истории Большой Страны". [12+]
0.35 Х/ф "Поговори со мною о любви". [12+]
3.50 Т/с "Версия". [16+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 18.00 Йома. [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан.**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.30 Счастливый час.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 Семәр. [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Концерт Залии Ганиятуллиной "Дочь степей". [12+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.00 Счастливый час. [12+]**

## 25 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Х/ф "А зори здесь тихие..." К 100-летию со дня рождения Бориса Васильева. [12+]
16.50 Премьера. "Я люблю мою страну".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". [16+]
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". Часть 3-я. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 "Закрытый показ" с Александром Гордоном. Премьера. Фильм "Варавва".
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
4.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Взрослые дочери". [16+]
0.35 Х/ф "Можно мне тебя обнять?" [12+]
4.00 Х/ф "Я его слепила". [12+]
5.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Ҡурай даны. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30 Ете егет. [12+]**
**9.15 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Детей много не бывает. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. Битва командиров. [6+]**
**11.45 Апчхи. [6+]**
**12.00 Сулпылар. Финалисты -2023. [6+]**
**12.30 КҮстәнәс. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 3.45 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 Все песни о прекрасном… [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.15 Бесприданница. [12+]**
**3.00 Новости недели (баш. яз). [12+]**
**4.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**6.00 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 26 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.50 Х/ф "Если можешь, прости..." К 75-летию со дня рождения Любови Полищук. [12+]
15.25 Х/ф "Вербовщик". [16+]
17.05 Д/ф "Любовь Полищук. "Последнее танго". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]

### РОССИЯ 1

6.15, 1.05 Х/ф "Подари мне немного тепла". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "С тобой хочу я быть всегда". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз). [12+]**
**13.15 Ете егет. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.15, 18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**15.30, 3.15 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**18.15 Д/ф "Книга жизни". [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан.**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 2.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Лилии Биктимировой "Счастье жить". [12+]**
**1.00 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**3.45, 6.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**4.30 Счастливый час. [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Май (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (12) дүшәмбе | 2:52 | 5:03 | 13:30 | 18:44 | 21:22 | 23:35 |
| 21 (13) шишәмбе | 2:51 | 5:02 | 13:30 | 18:45 | 21:24 | 23:36 |
| 22 (14) шаршамбы | 2:50 | 5:00 | 13:30 | 18:46 | 21:26 | 23:36 |
| 23 (15) кесе йома | 2:49 | 4:59 | 13:30 | 18:47 | 21:27 | 23:37 |
| 24 (16) йома | 2:49 | 4:57 | 13:30 | 18:48 | 21:29 | 23:38 |
| 25 (17) шәмбе | 2:48 | 4:56 | 13:30 | 18:48 | 21:30 | 23:39 |
| 26 (18) йәкшәмбе | 2:47 | 4:55 | 13:30 | 18:49 | 21:32 | 23:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 21 МАЙ - ХАЛЫҠ-АРА СӘЙ КӨНӨ

**Был байрамды билдәләү тураһында Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы 2019 йылда ғына иғлан итә. Ә донъяла иң таралған был эсемлеккә арналған көн булдырыуҙы халыҡ-ара ойошмалар үткән быуаттың 90-сы йылдарында уҡ тәҡдим иткән була.**

2004 йылда Мумбайҙа һәм 2005 йылда Порт-Алегриҙа үткән Бөтә донъя Йәмәғәт форумдарынан һуң 15 декабрҙә Сәй көнөн билдәләй башлайҙар. Ләкин ул рәсми түгел. Ә бына май айындағы байрам - рәсми кимәлдә уҙғарыла. Был көндә сәй үҫкән һәм уны етештергән илдәрҙә төрлө саралар ойошторола, Тотороҡло үҫеш программаһы маҡсаттарына ирешеүҙә сәй һәм сәй индустрияһының әһәмиәте, ғаилә менән ауыл хужалығында эшләү, традицион ауыл хужалыҡтары системаларын һаҡлау, биологик күп төрлөлөктө һәм тәбиғәткә яҡын булыуҙың мөһимлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Сәй тарихы былай башлана. Беҙҙең эраға тиклем III мең йыл элек йәшәгән Шень Нун тигән бер ҡытай императорының эҫе һыу ҡойолған кәсәһенә яңылыш ҡына сәй япраҡтары төшкән, был эсемлек уға шул ҡәҙәре оҡшаған һәм ул бөтә илдә сәй үҫтерергә әмер биргән, ти. Ә бына шул уҡ ҡытай риүәйәттәренең береһенә ярашлы, малдар сәй япрағын ашап теремекләнеп китеүен күҙәткән көтөүсе беренсе булып сәй яһап эскән, имеш. Нисек кенә булмаһын, сәйҙе тәү башлап ҡытайҙар ҡуллана, хатта уны дауа итеп беләләр һәм ул Тан династияһы осоронда киң тарала.

Көнбайыш Европаға сәйҙе XVII быуатта португалдар, голландтар, инглиздәр ташый башлай. Францияла сәй подагранан дауалай тип иҫәпләп ҡулланыла. Ә Бөйөк Британияға сәй Британия Ост-Һинд компанияһы тарафынан индерелә: ул саҡтағы королдең ҡатыны Екатерина сәйҙе бик ярата һәм һарайҙа сәй эсеү йолаһын индерә. Әйткәндәй, был матур йола көнөнә өс тапҡыр алкоголле эсемлектәр эскән байҙарҙы эскелектән арындырыуға ла булышлыҡ итә.

Рәсәйҙә лә сәй тураһында тәүге тапҡыр ошо осорҙа беләләр: Михаил Федорович батша хакимлыҡ иткән саҡта уға бер өлөш "ҡытай үләне"н бүләк итәләр һәм ул батша күңеленә хуш килә. Был үҙенсәлекле тауар Рәсәйҙә шунда уҡ киң ҡулланылышҡа инмәй - бик ҡиммәт була. Тик 18 быуат аҙағына Себер тракты тәҙәлгәс кенә Ҡытай менән бәйләнештәр яҡыная һәм сәйгә ихтыяж да арта. Бөгөнгө көндә иһә Рәсәй сәйхурҙар йәшәгән илдәр араһында Ҡытай, Һиндостан, Төркиәнән генә ҡалышып, 4-се урында тора.

Ҡытай сәйе килгәнсе илебеҙҙәге башҡа халыҡтар нисек торғандыр, ә бына беҙҙең ата-бабалар үҙебеҙҙә үҫкән хуш еҫле үләндәрҙән борондан сәйҙәр яһап эскәнен яҡшы беләбеҙ. Боланут сәйе ҡытайҙыҡынан һис ҡалышмай, шулаймы?






Сканворд (һорауҙар):

Сәйҙең тыуған иле
Йылҡы майынан ашамлыҡ
Көлһылыуҙың көймәһе
Һыу "каҙған" соҡор
Батырҙарҙы данлаған әҫәр
Веймар эргәһендәге концлагерь
Йөгөшло ауырыу
Ҡыр сусҡаһы
Аяҡ өлөшө
Моңло ҡош
Ассам сәйе етештеүсе ил
"Һаран (...)ын аҫҡанда төшөн ҡыҫыр"
"Туҙандан да (...) тыуа"
Ҡайындағы "тояҡ"
Эш араһында
Урта Азиялағы кафе
Йәнбикә менән Йәнбирҙе йәшәгән ер
Өләсәйҙең ҡумтаһы
Йыртҡыс ҡош
Йәшел сәй етештергән ил
Тауыҡ ярмаһы
Биҙәүес
Һалма йәйгес
"Яңылыш-ҡанға (...) юҡ"
"Ҡаскын" магма
Тәжрибә
"Мәшәҡәт һаҡал ағарта, ҡайғы (...) ағарта"
"Иҙел - Яйыҡтың ағаһы, Ағиҙел - илдең (...)һы"
Атҡа "аяҡ кейеме"
"Үҙендән олонан (...) ал"
Уйын
Арҡыры еп
Мексика индеецы
Аяҡтың сурайған һөйәге
Каренина
Сәй утрауы
Бер ауыҙ һүҙ
Һыуыҡта төшкән ысыҡ
Бәләкәй буйлы
Мөғәмәләләге нескәлек
Ебәк ҡорто яратҡан ағас





Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**18-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кәрим. Бәрәмәс. Кибет. Төрәк. Өҫтәл. Өҙөклөк. Хәрәфәт. Өйкөм. Өйрәк. Мөсәл. Тут. Гагра. Әмер. Сорт. Армыт. Вы. Фараз. Малай. Биҡҡол. Йылмаяҡ.

**Вертикаль буйынса:** Хамматов. Төркөстан. Фәйләсуф. Бөрө. Алабай. Көтөү. Көрәк. Тотка. Зәрҡүм. Бикчәнтәев. Ыҡ. Ул. Мисәт. Яҡ. Өкө. Грамм. Йола. Өйәр. Ләм. Алтай.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## "Туғанлыҡ" фестивале спектаклдәре

**20 май "Пегий пес, бегущий краем моря"** (С. Айтматов), А. Салауатов ис. Дағстан дәүләт ҡумыҡ музыкаль-драма театры. М. Кәрим ис. МЙТ сәхнәһендә. 15.00 16+

**"Карагүҙ"** (М. Ауэзов), С. Сәйфуллин ис. Ҡараганда төбәк академия ҡаҙаҡ драма театры. М. Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә.16+

**21 май "Ловелас"** (В. Семеновский), С. Я. Чанба ис. Абхазия дәүләт драма театры. 12.00 16+

**"Горе от ума"** (А. Грибоедов), Б. Басангов ис. Милли драма театры (Элиста). М. Кәрим ис. МЙТ сәхнәһендә. 15.00 16+

**"Пепел"** (К. Митани), Ғ. Камал ис. Татар дәүләт академия театры. "Нур" театры сәхнәһендә. 16+

**22 май "Белый пароход"** (С. Айтматов, У. Карыпбаев, Г. Осмонова), К. Жантошев ис. Ысыҡкүл төбәк музыкаль драма театры. М. Кәрим ис. МЙТ сәхнәһендә. 15.00 16+

**"Король лир"** (У. Шекспир). В. Тхапсаев ис. Төньяҡ Осетия дәүләт академия театры. М. Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә.16+

**23 май "Туғанлыҡ"** Милли театрҙарҙың халыҡ-ара фестивален ябыу тантанаһы. М. Ғафури ис. БАДТ сәхнәһендә.

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 май "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 май "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 10.00, 12.00 0+

**23 май "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

**26 май "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 12.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23-24 май "Чем пахнут одуванчики?"** (В. Щербакова). 16.00, 18.00 0+

**24 май Премьера! "Озеро заколдованного коня"** (Ғ. Шафиҡов), "Аҡбуҙат" башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+

**25 май "Муха-цокотуха"** (К. Чуковский). 12.00, 15.00 0+

**"Чем пахнут одуванчики?"** (В. Щербакова). 14.00 0+

**26 май "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 май** Орган залында миҙгелде ябыу. Филармонияның Камерный оркестры. 6+

**22 май "Ҡабатланмаҫ..."** Ф. Иҡсановтың хәтер кисәһе. 6+

**23 май "Барокко иленә музыкаль сәйәхәт"** Оксана Федорованың шәфҡәтлек концерты. 14.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**23 май Премьера! "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х. Латипова, С. Латипов), музыкаль комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

*"Ҙур гастролдәр" сиктәрендә Дербент ҡалаһынан Әзербайжан дәүләт драма театры килә:*

**23 май "Муж и жена"** (У. Гаджибеков), комедия. 12+

**24 май "Умный человек"** (Ф. Мостафа), ҡара комедия. 12+

**25 май "Мусье Жордан и Дарвиш Мастали шах"** (М. Ф. Ахундов), комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**18 май Музейҙар төнө.** 18.00-23.00 0+

**21 май "Бал ҡортонда ҡунаҡта"** сара. 12.00 6+

**24 май "Өфө: 450 бит тарих"** күргәҙмәһе асылы. 15.00 0+

**"Боронғо һунарсылар эҙенән"** сара. 15.00 6+

АФАРИН!



# ЙӘШӘҮ ХАҠЫНА

**Еңеү көнөндә Өфөлә федераль кимәлдәге ваҡиға - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, уларҙың ғаиләләренә һәм яҡындарына арналған "Йәшәү хаҡына" тигән яңы театр-хореография сюитаһының премьераһы булды.**

Яңы бейеүҙе "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында һәр ваҡыт республиканың күп милләтле халҡының тарихын сағылдырған Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле күрһәтте. Был бейеү ансамбль репертуарына киләһе миҙгелдә индереләсәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса совет ултырышы барышында Башҡортостан Башлығы сәнғәттең төрлө төрҙәрендә һәм жанрҙарында Махсус хәрби операция темаһына бағышланған художестволы әҫәрҙәр ижад итеү кәрәклеген билдәләгәйне.

Ғәскәров исемендәге ансамбль директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Нәзир Байегетов һөйләүенсә, яңы бейеүҙең тарихы 2023 йылдың сентябрендә Луганск Халыҡ Республикаһына сәфәр ваҡытында яугирҙар менән аралашыуҙар мәлендә тыуған. Улар башҡорт полктары буйлап йөрөгән, егеттәрҙең нисек хеҙмәт иткәнен, ҡайҙа йәшәгәнен ҡараған. Ансамбль исеменән яҡташ яугирҙарыбыҙға автомобиль тапшырғандар. Ғәскәровсылар ул саҡта Рәсәйҙең яңы төбәктәрендә -Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч, Запорожье өлкәһенең Бердянск һәм Мелитополь ҡалаларында сығыш яһаған тәүге ижади коллектив булды.

- Шул саҡта Махсус хәрби операция ваҡиғаларын тарихта ҡалдырыу уйы килеп тыуҙы ла инде. Беҙҙең репертуарҙа Ватанды һаҡлаған яугирҙарға арналған Фәйзи Ғәскәровтың 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһында "Төньяҡ амурҙары", Бөйөк Ватан һуғышының легендар комдивы хаҡында "Генерал Шайморатов" бейеүҙәре бар, - тип билдәләне Нәзир Байегетов. - Беҙ үҙебеҙҙең бейеүҙә ҡаһарман яугирҙарыбыҙҙы ғына түгел, көн һайын уларҙың именлеге өсөн доға ҡылған туғандарының, ҡатындарының, апай-һеңлеләренең, инәй-өләсәйҙәренең хис-тойғоларын, кисерештәрен сағылдырырға теләнек. Тылдағылар изге ғәмәлдәре менән ярҙам күрһәтә. Хәҙер маскировка селтәрҙәре үргән ирекмән ойошмалары күп, был да сәхнәлә сағылыш тапты. Ошо бейеүҙе ҡараған барлыҡ тамашасылар иланы...

Бейеүҙең тәүге лирик өлөшө ҡыҙҙарҙың маскировка селтәре үреүен күрһәтә. Икенсе өлөшөндә иһә яу күренеше. Бейеүҙең финалында ҡыҙҙар тыуған яҡтарына ҡайтҡан яугирҙар менән осраша.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАРЫҒЫҘ, КҮРЕГЕҘ!

**(Башы 1-се биттә).**



"Торатау геопаркы" генераль директоры Артур Иҙелбаев һөйләүенсә, тағы бер тирмә ҡунаҡтарҙы башҡорт еренең быуаттар буйына дауам иткән йолалары менән таныштырыу өсөн файҙаланыласаҡ. Геопарк геогидтары туристар өсөн милли кейем һәм изделиелар эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәреләсәге, улар өсөн традицион башҡорт тәм-томдары һәм балы менән сәй эсеү ойоштороласағы хаҡында һөйләне. Республика Башлығы Милли кейем көнөндә оҫталар һәм һөнәрселәр менән осрашыу барышында халыҡ биҙәү-ҡулланма сәнғәтенә ярҙам итеү буйынса республика программаһына халыҡ кейемдәре эшләү менән шөғөлләнгән оҫталарҙы индерергә ҡушыуын иҫкә төшөрҙө. "Был инде йөҙҙәрсә кеше эшләгән һәм уларҙың изделиелары һорау менән файҙаланған бизнесҡа әйләнгән. Мин дәүләт яғынан ярҙам кәрәк тип иҫәпләйем", - тине республика Башлығы.

Презентациялар (лекторийҙар) залында балалар өсөн тематик лекциялар, фәнни берләшмәләр осрашыуҙары, конференциялар һәм башҡа фәнни-популяр саралар үтәсәк. Бында осрашыуҙарҙы уңайлы үткәреү өсөн бөтә кәрәкле ҡорамалдар ҡуйылған. Ике тирмә ҡунаҡ йорто буласаҡ. Туристар өсөн улар уңайлы йоҡо урындары, аш-һыу бүлмәләре һәм санузелдар менән йыһазландырылған. Тирмәләр бербереһенә ағас һуҡмаҡ менән тоташтырылған. Улар янында сәскәле ҡыуаҡтар, емеш ағастары ултыртылған. Радий Хәбиров шулай уҡ "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһы сиктәрендә "Торатау" геопаркына килгән пенсионерҙар менән аралашты. Улар төбәк Башлығына тыуған республиканың матурлығын күреү мөмкинлеге өсөн рәхмәт белдерҙе. "Беҙ мотлаҡ рәүештә "Башҡортостандың оҙон ғүмерлелеге" программаһын финанслауҙы дауам итәсәкбеҙ. Ваҡыт етер, бюджет саралары мөмкинлек бирер һәм беҙ уны 50 меңдән ашыу кешегә еткерә алырбыҙ, тип ышанам. Шул уҡ ваҡытта йылдан-йыл Башҡортостандың туристик мөмкинлектәрен киңәйтәбеҙ, беҙҙә мотлаҡ ҡарарға кәрәкле матур урындар күп", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

"Ниндәйҙер туристик объектты үҫтерһәк, күңелем шатлана. Торатау үҙе уникаль тәбиғәт объекты, уның тирәләй туристик инфраструктура етмәй ине, ә хәҙер бында туристар килә, баҫҡыс эшләнеләр, Торатау тирәләй юл һалынды. Был бит иң матур урындар. Туристарға һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашарға, ҡул йыуырға, интернет, сувенирҙар һатып алырға, бәләкәй генә булһа ла ҡунаҡхана кәрәк. Бында барыһы ла бар. Башҡа объекттар ҙа барлыҡҡа киләсәк", - тип һөйләне Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, Торатау геопаркы Урал тауҙарының көньяҡ өлөшөндә һәм Көнсығыш Европа платформаһының көнсығыш ситендә урынлашҡан. Ул төрлө геологик объекттарға бай, ҡайһы берҙәренең йәше 1 миллиард йылға етә. Геопарк майҙаны 2299 кв.км, сиктәре Ғафури, Ишембай һәм Стәрлетамаҡ райондары биләмәләре буйлап үтә. Геопарк 155 тәбиғәт объектын үҙ эсенә ала, шуларҙың 27-һе айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре, 103 геологик объект һәм 126 тарихи-мәҙәни объект. Төп объекттары - Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау шихандары, "Усолка" һәм "Алыҫ Төлкәҫ" геологик киҫелештәре халыҡ-ара әһәмиәткә эйә. Иң популяр нөктәләр геопарктың 7 үҙәге: Торатау, Красноусол, Ғүмәр, Маҡар, Толпар, Воскресенское, Таш-Аҫты.Былтыр Торатау янындағы визит-үҙәккә 115 000 кеше килгән, 140 экскурсия үткәрелгән. Геопарктың берҙәм навигация системаһы ҡарарҙарына ярашлы, геопарк объекттарының тәбиғи, геологик, тарихи-мәҙәни үҙенсәлектәре тураһында һөйләүсе мәғлүмәт стендтарын ҡуйыу буйынса эштәр тамамланған.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕК КЕЙГӘНДЕҢ...

## барыһы ла батыр түгел

Әхлаҡты камиллаштырыуҙың сере шунда: һәр көнөндө ғүмереңдең һуңғы көнө һымаҡ йәшә - тулҡынланма, ҡурҡма, ҡыланма.

**(Марк Аврелий).**

Дөрөҫөн әйткәндә, никах - ул яуызлыҡ, ләкин һәр кемгә кәрәкле яуызлыҡ.

**(Сократ).**

Намыҫлы, әммә ҡыҫҡа ғүмер оятһыҙ, әммә оҙон ғүмерҙән өҫтөн тора.

**(Эпиктет).**

Еңә алмаған ҡаршылыҡҡа ҡаршы сыҡма.

**(Аттила).**

Никах - йоланың яртыһы ғына, ҡалған яртыһы - түҙемлек.

**(Махома).**

Күҙҙәр берҙе һөйләп, тел икенсене һөйләгәндә, тәжрибәле кеше уларҙың тәүгеһенә ышана.

**(Ралф Эмерсон).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:**

**"- Хөрмәтле Уҡытыусым, - тип мөрәжәғәт итә бер ваҡыт уҡыусыһы Уҡытыусыһына, - мин тормошта үҙ маҡсатыңа өлгәшеүҙең ун принцибы бар тип ишеттем, тик улар тураһында бер ни ҙә белмәйем.**

**- Мин ул принциптарға һине өйрәтә алмайым, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Әммә ул принциптарға өйрәтә ала торған кешеләрҙе беләм...**

**- Кемдәр һуң улар? - тип һорай уҡыусы.**

**- Тәүге өс принципҡа һине бала, ҡалған етәүһенә уғры өйрәтә аласаҡ, - ти Уҡытыусы аптырап ҡалған уҡыусыһына. - Эйе, беренсенән, баланан һин һис ниндәй сәбәпһеҙ ҡыуанырға, икенсенән, бер минут та тик ултырмаҫҡа, өсөнсөнән, теләгәнеңде ҡысҡырып һәм ныҡышмалы талап итергә өйрәнерһең.**

**- Ярай, хөрмәтле Уҡытыусым,- ти уҡыусы,- ә уғры мине нимәгә өйрәтә ала һуң?**

**- Беренсенән, эшеңде йәшерен эшләргә, икенсенән, әгәр эшеңде бер төн эсендә тамамламаһаң, уны икенсе төндә лә дауам итергә, өсөнсөнән, бер юлда йөрөгән дуҫтарыңды һәм иптәштәреңде хөрмәт итергә, дүртенсенән, маҡсатыңа өлгәшеү өсөн ғүмереңде лә бирергә, бишенсенән, бар булған нәмәңде ябай ғына булһа ла яңыға алмаштырырға ҡурҡмаҫҡа, алтынсынан, бер ниндәй ҡаршылыҡтар алдында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа, етенсенән, үҙ эшеңә тоғро ҡалырға өйрәтер".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24019

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА, Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
16 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 111870